*✓ һәр бөйөк эш ябай, етди, һиҙелеп бармаған шарттарҙа башҡарыла. Ялтырауыҡтар, шау-шыуҙар, кәперенеүҙәр аҫтында һөрөп тә, сәсеп тә, төҙөп тә, хатта фекерләп тә булмай.*

*(Лев Толстой).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

13 - 19 НОЯБРЬ (ҠЫРПАҒАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№46 (412)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Беҙ тәрбиәләмәһәк...**

кем тәрбиәләр рухты!



4

**Имтихан бирәм, тиһәң...**

репетитор эҙлә



5

**Сит ил йәнһүрәтенән...**

балаңды мөмкин тиклем ситләштер



6

**Тамырың ныҡ булһа...**

олоноң бирешмәҫ



7

14 **ТВ-программа**


## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Беҙ күп ваҡыт үткән замандағы ҡаҙаныштар, еңеүҙәр менән маһайып, эйфорияла йәшәйбеҙ. Был беҙгә алға барырға ҡамасауламаймы икән?

***Дамир САУБАНОВ, уҡытыусы:*** Кеше артҡа түгел, алға ҡарап, киләсәккә төбәлеп йәшәргә тейеш. Үткәндәр беҙгә ғибрәт алыу өсөн кәрәк. Фәһем алам тиһәң, үҙеңдән алға киткән кешеләргә ҡара. Исмаһам, бер үк тырмаға ҡабат баҫмаҫ өсөн генә булһа ла. Үҫеш - алға китеш, тимәк, үткәндәр - хәҙергенән, бөгөнгө иртәгәнән хөртөрәк. Хөрт нәмәнән фәһем алып булмай.

***Әклимә Имамова, Күмертау калаһы:*** Байраҡ болғап йөрөүсе, гел трибуна артына сығып, Башҡортостан Республикаһына суверенитет яулаған замандағы эштәре менән маҡтанып, хәҙерге сәйәсмәндәрҙе һәм етәкселәрҙе хурларға яратыусы бер абзыйҙы беләм. Тегене эшләмәйһегеҙ, быны эшләмәйһегеҙ, тип һөйләнергә барыбыҙ ҙа шәп, ә бына һин үҙең ниндәй эштәр ҡылдың, милләтең өсөн ниндәй яҡшылыҡтар эшләп ҡалдырҙың һуң, тип әйтке килә уға. Тәү сиратта, үткәндәге эштәрең менән маҡтанырға түгел, ә ул эшеңдең һөҙөмтәһен күрһәтергә кәрәк бит.

***Тимур Лоҡманов, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы:*** Бына американдарҙың бер ил халҡы булып формалашыуына 200 йыл да үтмәгән. Улар - мобиль халыҡ, хаталарын төҙәтә, уларҙан һабаҡ ала белә. Киләсәккә яңы офоҡтар, үҫеш йүнәлештәре билдәләп, уларға өлгәшергә ынтыла. Беҙгә лә үткәндәр менән йәшәргә түгел, алда барыусыларға эйәрергә, уларҙан өлгө алырға кәрәк. Быға, бәлки, тап беҙҙең боронғолоҡ ҡамасаулайҙыр ҙа ул...

***Сәйфулла Сәлимов, Сибай ҡалаһы:*** Кешенең уйы, фекере уның эше менән бәйле булырға тейеш, тик шул саҡта ғына алға китеш, үҫеш була. Ата-бабаларыбыҙ тәүәккәл булған, тимерҙе ҡыҙыуында һуҡҡан, тип күпме генә һөйләмә, үҙең ошо сифаттарҙы мираҫ итеп алмағанһың, кәрәк мәлдә албырғап ҡалаһың икән, үткәндәр менән маҡтаныуҙан файҙа юҡ, әлбиттә. Ата-бабалар, эйе, тәүәккәл булған, әммә был беҙгә эйфорияла йәшәргә хоҡуҡ бирмәй. Фәһем алырға, өлгө алырға була, әммә маҡтанырға ярамай. Һәр кем, һәр дәүер - үҙе ҡылғандар өсөн яуаплы.

## МОНОЛОГ

# РӘСӘЙ ХАЛҠЫ ТРОЛЛЕЙБУСТА БАРА...

**Троллейбус - ул дәүләткә генә ышанып ултырыу. Троллейбустан төшөү - ул дәүләткә генә ышанып ултырыуҙан туҡтау. Троллейбустан төшәйек, йәмәғәт!**



**"Беҙҙең хәҙерге йәшәйешебеҙҙе троллейбуста барыу менән сағыштырыр инем. Ә бына совет осоронда трамвайҙа бара инек буғай. Маршрутыбыҙ билдәле булды, рельстан ситкә сығыу - илгә хыянат итеү, һәләкәткә осрау, тип баһаланды. Касса аппаратына 3 тин төшөрөп (төшөрмәйенсә лә), билет йыртып алдыҡ та, әйләнсек һарыҡ кеүек, бер тирәлә әйләнеп тик йөрөнөк. Үҙгәртеп ҡороуҙар күпте вәғәҙәләне. Рәсәй - донъя капиталынан, беҙ федераль үҙәктән бойондороҡһоҙ булырға тырыштыҡ, күп кенә вәкәләтлектәр (һуңынан кире тартып алынды, сөнки Үҙәккә аҡса күп кәрәк) бүлештек, әммә Рәсәй үҙе лә, шул иҫәптән беҙ ҙә үҙебеҙҙең карапта донъя океаны буйлап йөҙөп китә алманыҡ. Бары тик трамвайҙан троллейбусҡа күсеп кенә ултырҙыҡ шикелле. Бында, трамвайҙан айырмалы рәүештә, маршруттан тегеләй-былай ике-өс аҙым күсеү мөмкинлеге генә алдыҡ. Шул уҡ маршрут инде, тик ҡайһы берҙә аңғармаҫтан ситкә сығып китеү мөмкинлегенә генә эйәбеҙ. Ул осраҡта ла троллейбусыбыҙ, имсәктән айырылған бала кеүек, электр энергияһыҙ шып туҡталып ҡала. Тотош ҡалала ут һүнһә лә, троллейбус туҡталып ҡала. Троллейбусты йөрөтөүсе энергияны энергетик сеймал (электр энергияһы, нефть, газ) тип алһаҡ, илебеҙ ҙә тап ошо троллейбус хәлендә, йәғни уның йәшәү-йәшәмәүе тулыһынса шул сеймалға ғына бәйле.**

**Троллейбус образын юҡҡа ғына алманыҡ. Рәсәй иҡтисады хәҙерге заманда донъяның бер иле менән дә конкурентлыҡта ярыша алмай, йәғни сеймалыбыҙҙан һәм һуғыш ҡоралдарыбыҙҙан тыш бер генә тауарыбыҙға ла донъя баҙарында ихтыяж юҡ. Әгәр ҙә энергетик ресурстарыбыҙ бөтә ҡалһа, илебеҙ шып туҡтаған ошо троллейбус хәлендә ҡаласаҡ". Шул һүҙҙәрҙән башланды иҡтисад фәндәре докторы Илдар Үзбәк улы ЗӨЛҠӘРНӘЙ менән редакциялағы әңгәмәбеҙ. Иҡтисадсы-ғалимдың Рәсәй һәм Башҡортостан иҡтисадын күтәреү мәсьәләләре хаҡындағы үтә актуаль, заманға ауаздаш фекерҙәрен тыңлағас... тотош бер иҡтисади курс үткәндәй булынды. Ул гәзит уҡыусыларыбыҙға ла ҡыҙыҡлы һәм фәһемле булыр, тип ышанабыҙ.**


**(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).**

ИШАРА

# ХИКМӘТ ЮҒАЛҒАН...

## әммә хикмәтте эҙләүҙе дауам итәбеҙ

**Һуңғы йылдарҙа мин телевизорымды тоҡандырырға ла ҡурҡып йөшәйем. Ниһайәт, бер кис асып ҡарарға булдым уны. Беренсе каналда бер ҙур эт баланың ҡулын тешләп алырға ынтылғайны, был ытырғаныс хәлде күрмәҫ өсөн тиҙ генә икенсе каналға күстем. Ул каналды иғтибар менән ҡарай башлағайным, йылмайып атлап барыусы ҡыҙыҡайға бер өй мөйөшөнән бер бандит ташланырға көтөп тора. Инде ташланам ғына тигәндә, мин тиҙ генә өсөнсө каналға күстем. Уныһында иһә ҡанға батҡан кешене күрһәтәләр. "Ах!" тип, телевизорымды бөтөнләй һүндереп ҡуйҙым.**

Бик күптән ҡарағайным: "Ну, погоди!" йәнһүрәтенең береһендә бүре һыһыу ғына этҡыҙыҡайҙы күреп ҡала ла, ҡайны өйҙә йөшәгәнен иҫендә ҡалдырып, йүгереп барып матур ғына гөлләмә һатып ала һәм уның артынан баяғы өйгә барып инә. Былар ҙы телевизор аша ҡуян ҡарап ултыра. Бүре, яңылышып, беренсе ҡаттағы фатирға барып инһә, унда һыйыр-ханым кер йыуып маташа. Бүре, ярай инде, тип, һыйырға гөлләмәһен бирергә итһә, икенсе бүлмәнән күҙҙәренән осҡондар осороп үгеҙ килеп сыға. Ҡуян тиҙ генә телевизорының төймәһен баҫа һала. Бүре икенсе ҡаттағы фатирға күсә. Ә унда юлбарыҫтың бисәһе аш әҙерләп йөрөй. Бүре гөлләмәһен бүләк итергә итһә, икенсе бүлмәнән ата юлбарыҫ килеп сыға. Быны күргән ҡуян өсөнсө төймәгә баҫа ла, тұҙмәйенсә, һикереп телевизор эсенә инеп китә. Бына ошо урынына тиклем генә ҡарағайным ул йәнһүрәтте. Күршем ишек ҡағып, аҙағын күрә алмағайным. Әлбиттә: "Ну, заяц, ну, погоди!" тип тамамланалыр инде ул йәнһүрәт. Шуны ҡарағым килеп, тағы ҡабатлап күрһәтеүҙәрен көтәм, тик күрһәтмәйҙәр. Телевизорымды тоҡандырам тиһәм, шул йәнһүрәт иҫкә төшә лә ҡуя.

Ниңә Рәсәйҙә АҠШ триллер-боевиктарын бер туҡтауһыҙ күрһәтәләр? Шул тиклем күп фильмдар һатып алырға ҡайҙан аҡса табалар икән? Ил башлыҡтары был фильмдарҙы күрһәтеп, Рәсәй халҡының рухын ҡаҡшатыу эше башҡарыла икәнен беләме икән? Улар үҙҙәре был ҡурҡыныстарҙы ҡараймы икән? Ошондай һорауҙар тыуа башымда. Әлбиттә, был боевиктарҙы ололар ҡарамай, йәштәр ҡарай. Аҙаҡтан: "Ни өсөн беҙҙең ҡайһы бер йәш быуын вәкилдәре агрессив холоҡло?" - тип аптырайбыҙ.

Кемдер бөрөү: "Был инәй ни өсөн гел телевизион тапшырыуҙар тураһында яҙа?" - тип әйтер. Телевизорың булғас, һирәк булһа ла уны тоҡандырып ҡарамай, йә программаһын уҡымай булмай. Берәй хикмәт күрермен, фәһемле фекер ишетермен, тиһең. Бик йыш был өмөтөң аҡланмай. "Исламдың әхләҡи ҡиммәттәре" тапшырыуында "Хикмәт - кешенең юғалтҡан нәмәһе ул" тип әйткәйнеләр. Әммә кеше ул хикмәтте эҙләүен дауам итә шул инде...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# АСЫЛҒА ТИКЛЕМ СИГЕНДЕК

## Ә уның аръяғында нимә бар?

**Атаҡлы Мөжәүир хәҙрәткә төрлө сәбәптәр арҡаһында барып күренеүсе күптәр, ни өсөндөр, хәҙрәттең килгән кешене шундуҡ кинәйәләр, ишаралар менән төрттөрөп әрләп ташлауы хаҡында һөйләй.**

Хәҙрәт кемдендер юлда килгәндә тәмәке тартыуын, йә араҡы шешәһен юлда йәшереп китеүен, йә ҡатынын, балаларын, башҡа кешеләрҙе алъюҫыҡҡа рәнйетеүен, йә башҡа етешһеҙлек-кәмселектәрен әйтеп, үҙебеҙсә әйткәндә, "ҡыҙған таба"ға баҫтырып алыр булған. Уның тәүге тапҡыр күргән кешенең холҡо, үткән ғүмере, ҡылған ғәмелдәре хаҡында нисек итеп, ниндәй юлдар менән аныҡ белеүе, күрәҙәлек итеүе аптыратмай мине. Сөнки Мөжәүир хәҙрәт дин юлында фиҙаҡәрлек күрһәтеп, Аллаһы Тәғәләнең хозурына ирешеп, Унан ошондай хикмәттәрҙе алыуға өлгәшкән суфый йән. Бында икенсе мәсьәлә хикмәтлерәк: ни өсөн хәҙрәт үҙ ғүмерендә тәүге тапҡыр күргән кешене йөҙөнән алған һуң?

Һис шикһеҙ, үҙенә килгән кешенең барлыҡ гәйебен, гонаһын кинәйә, ишара менән булһа ла әйтеп, Мөжәүир хәҙрәт үҙенә теге йәки был сәбәп (күберәген ауырыу, сир, боҙом, сихыр) менән килгән кешене "сыр-яланғас" ҡалдырып, аҡланырға, кемгәләр йә нимәгәләр һылтанырға урын ҡалдырмағандыр, тип уйланыла. Дөрөҫөрәк итеп әйткәндә, хәҙрәт кешене үҙ асылына тиклем сигендереп, нимәгәләр ышыҡланырға йә үҙ-үҙлеген уратып үтергә урын ҡалдырмаған, кешене үҙе һәм үҙен борсоған мәсьәлә хаҡында асыҡтан-асыҡ һөйләргә мәжбүр иткән...

ӘЙТКӘНДӘЙ....

**Яңыраҡ Башҡортостан телевидениеһының "Яңылыҡтар" сығарылышында Әбйәлил районының Аһылай (Өскүл, Назаркино) ауылы янындағы күлдең Магнитогорск ҡалаһы ойошмаһына ҡуртымға бирелеүе, ошо сәбәпле ауыл халҡының был хәл менән килешә алмауы хаҡында һөйләнелгәйне. Шуныһы ҡыҙыҡ һәм ҡыҙғаныс: ауыл халҡы был хәлгә риза булмауын бары тик үҙенең мал-тыуарын көтөү һәм һуғарыу мөмкинлеге тарайыуына бәйләп кенә аңлата. Шулай шул, донъя беҙҙе асылыбыҙға тиклем сигендерә килә. Тик урмандарыбыҙ, күлдәребеҙ һатылып, сабынлыҡһыҙ, баҡсаһыҙ ҡалғас ҡына телгә килербеҙ ҙә, асылыбыҙҙы иҫебеҙгә төшөрөрбөҙмө? Тик асылыбыҙ аръяғында нимә бар?**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

ИҒТИБАР!

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



Дыуан районының башҡорт теле уҡытыусылары.

**2011 йылдың беренсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу барыуы тураһында тағы ла бер тапҡыр иҫегеҙгә төшөрәбеҙ.**

➔ Әлбиттә, гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәр бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ. Уларға **микротулҡынлы мейес, кесә телефоны, сепаратор, электр сәйнүге, үтек** һәм башҡа төрлө матур бүләктәр отторасаҡбыҙ. Квитанцияларын тәүгеләрҙән булып ебәргән 300 кеше "Дини календарь" алып ҡыуанасаҡ.

➔ Әйткәндәй, кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

➔ "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атаәсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**50665** индекслы **"Киске Өфө"** алты айға **330 һум 24 тин, 50673** индекслыһы (предприятие һәм ойошмалар өсөн) - **360 һум 24 тин** тора.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Интернетта Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитовтың рәсми сайты асылды. Сайтта БР Президентының эшмәкәрлеге, уның статусы һәм вәкәләттәре, власть органдарының үҙ-ара хеҙмәттәшлек механизмдары, эске сәйәсәт, эш графигы менән танышырға мөмкин. Унда Президентҡа нисек хат яҙыу һәм ебәреү, ҡабул итеүгә әләгеү тураһында ентекле аңлатылған.

✔Башҡортостан Республикаһы Президенты "Башҡортостан Республикаһының Шаяндар һәм Тапҡырҙар клубы" төбәк йәштәр йәмәғәт ойошмаһының мөрәжәғәтен хупланы һәм төбәк исеменән Юғары лигала сығыш яһарлыҡ республика командаһын ойоштороорға ҡушты. Әле республикала йөҙҙән ашыу КВН командаһы бар, шулай уҡ 15 КВН лигаһы эшләп килә. Шул тиклем шаяндар һәм тапҡырҙарҙан бер Юғары лига командаһы ғына төҙөп булмаҫмы икән ни?

✔Ноябрь аҙағында Башҡортостанға М-5 федераль трассаһын үҫтереүгә 4,2 млрд һум аҡса киләсәк. Аҡса Зинин һәм Жуков ауылдары районындағы федераль трасса участкаһын реконструкциялауға тотоноласаҡ. Өс һыҙатлы юл һәм Ағиҙел йылғаһы аша күпер төҙөү планлаштырыла. Ике йылдан һуң тағы ла 5,2 млрд һумлыҡ яңы транш көтөлә. Киләсәктә шулай уҡ М-7 федераль трассаһының Кушнаренко ауылын урап үтәсәк участкаһын төҙөүгә лә аҡса бүленәсәк.

✔БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - БР Хөкүмәте Аппараты етәксеһе Илшат Тажетдинов, БР иҡтисади үҫеш министры Владимир Балабанов, БР-ҙың Япониялағы рәсми вәкиле, БР Президенты советнигы Ришат Муллагилдиндан торған делегация Япониялә IV Рәсәй-Япония инвестиция форумында ҡатнашты. Сәфәр барышында Япониядың потенциаль инвесторҙарын Башҡортостандың инвестиция ҡеүәте менән, мәсәләнән, файҙалы ҡаҙылмалар сығарыу һәм эшкәртеү, агросәнәғәт комплексы, урман хужалығы, төҙөлөш индустрияһы, тау саңғыһы курорттары ойоштороу, туризм өлкәһендә проекттар менән таныштырыу тормошҡа ашырылды.

✔БР Хөкүмәтенең Фән һәм техника өлкәһендәге дәүләт республика йәштәр премияны буйынса комиссияһы 2009 йыл өсөн техник фән өлкәһендәге премияны Александр Вәлиев, Сергей Китаев, Илдар Шаммазовҡа, тәбиғи фән өлкәһендә - Дамир һәм Әмир Ҡотлояровтарға, гуманитар фән өлкәһендә Илгиз Солтанморатовҡа бирергә ҡарар итте.

✓ *Ул боронғо латин теленән "һайлап ҡуйылған, вәкәләтле кеше" тип тәржемә ителә икән, баҡтиһәң. Ә беҙҙә депутат статусын һатып алалар. Шуға ла уларҙы бөгөн "һатыпалыутат" тип атарға ла мөмкин.*



АҘНА ШАҢДАУЫ

# ЯҢЫ ҺҮҘҘӘР, ЯҢЫ МӘҒӘНӘЛӘР,

## йәки Модернизациямы, оптимизациямы?

**Яңы заманалар яңы кешеләрҙе генә түгел, яңы һүҙҙәрҙе лә тыуҙыра икән, йәмәғәт. Йә булмаһа, иҫкеләренә яңы мәғәнә һала. Хәтерләйһегеҙҙер уларҙы? Яңы кешеләрҙе түгел. Уларҙы беҙ бөтәбеҙ ҙә беләбеҙ. Мәҫәлән, КГБ подполковнигы. Йәки университет доценты. Кисә улар кем ине лә, бөгөн улар кем? Шуға ла улар хаҡында ләм-мим. Яңы һүҙҙәр хаҡында бөгөн һүҙебеҙ.**

Хәтерләйһегеҙме? "Перестройка", йәғни үҙгәртеп ҡороу. Шунан башланды бит яңы заманалар, яңы кешеләр һәм яңы һүҙҙәр дәүере. Ваҡытында был һүҙ яп-ябай, үҙенең ысын мәғәнәһендә эйә ине. Унан берәү ҙә ҡурҡып торманы. Ә хәҙер? Ул заманаларҙа йәшәгәндәр был һүҙҙе ишетһәме?.. Тулғаҡтары тотоп, ауыҙҙарынан күбек китә.

Артабан да яңы һүҙҙәр күбәйгәндән-күбәйҙе генә. Демократизация тигән бер яңы һүҙ килеп сыҡты. Нимәне аңлата икән ул, тип аптырағанда, берәү образлы итеп төшөндөрҙө - йәнәһе, канал була һәм канализация була. Бында ла шулай уҡ. Демократия - ул канал. Ә демократизация иһә... канализация кеүегерәк бер нәмә инде. Тағы ла яңы һүҙҙәрҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле, йәмәғәт. Эйе, береһе ваучер. Ә икенсеһе? Дөрөҫ, чубайс! Ҡайһы һүҙ нимәне аңлата әле? Хәтерләйһегеҙме? Юҡмы ни? Береһе "киммәтле" ҡағыҙ ине. Ә икенсеһе иһә, шул "ҡағыҙ" кисәген уйлап сығарып, илебеҙҙе бөгөнгө "бөйөклөк"тәргә һәм "бейеклектәр"гә алып барып еткергән әҙәмдәрҙең береһе инде. Тағы ниндәй яңы һүҙҙәр бар хәтерегеҙҙә? Федерация тигәнеме? Онотоғоҙ уны. Унитаризация тигән яңы һүҙгә өйрәнергә ваҡыт. Әллә "унитазизациямы"? Шулай уҡ президент һүҙен да онотоп торoғоҙ. Илдә президент берәү генә була тине бит Рамзан Ҡадиров һәм Рәсәй Дәүләт Думаһы. Күп ҡалманы, тиҙ арала ул һүҙҙе республикалар башлыҡтарынан тартып аласаҡтар. Асылда, тартып алдылар инде.

Дилер, брокер, фракция, олигарх, акция һәм монетизация тигән яңы һүҙҙәр ҙә булды, тимәксеһегеҙме? Дөрөҫ, дөрөҫ һәм тағы ла берҙе дөрөҫ! Шул уҡ рәткә тағы ла "реформа" һүҙен дә индерегеҙ әле. Ул халыҡ араһында ысын мәғәнәһендәге ҡурҡыу тойғоһо уята ла баһа. Ҡайһы берәүҙәр уны ишетһә, ҡалтырана башлай хатта.

Йәмәғәт, иҫкеләрҙән һаналған "депутат" һүҙенә бөтөнләй яңы мәғәнә һалынды һуңғы арала. Ул боронғо латин теленән "һайлап ҡуйылған, вәкәләтле кеше" тип тәржемә ителә икән, баҡтиһәң. Ә беҙҙә депутат статусын һатып алалар. Шуға ла уларҙы бөгөн "һатыпалыутат" тип атарға ла мөмкин. Депутат итеп тәғәйенләп ҡуйыуҙары ла бик ихтимал.

Бынан тыш, йәмәғәт, һуңғы йылдарҙа тағы ла бер нисә яңы һүҙ барлыҡҡа килде. Мәҫәлән, нанотехнология. О-о-о, ул бик өмөтлө йүнәлеш, тиҙәр. Ул технологияларҙы үҫтерһәк, әллә ниндәй, быға тиклем мөмкин булмаған сифаттарға эйә яңы материалдар эшләргә була, имеш. Ә, беләһегеҙме, ул "нано" менән бөгөн кем шөғөлләнә (йәғни, дәүләт ҡаҙнаһының нанотехнологияларҙы үҫтереүгә тәғәйенләнгән аҡсаһын туҙҙыра)? Чубайс, йәмәғәт. Әлеге лә баяғы шул Чубайс.

Бынан тыш, бик матур яңғыраған тағы ике һүҙ барлыҡҡа килде - модернизация һәм оптимизация. Шундай ыңғай һәм матур һүҙҙәр. Модерн - ул латинсанан "өр-яңы, заманса" тигән һүҙ. Тимәк, модернизация - ул нимәнелер яңыртыу, яҡшыртыу, үҙгәртеү. Бәс, шул уҡ үҙгәртеп ҡороу булып сыға түгелме, тиерһегеҙ. Юҡ, йәмәғәт. Ябай ғына миҫалды алайыҡ. Йәшәгән йортто үҙгәртеп ҡорорға булдыҡ, имеш. Уны һүтеп, иҫке бүрәнәләрҙе бер мөйөштән икенсеһенә килтереп, нисек теләйһең, шулай өйөп ҡуйһаң, ул үҙгәртеп ҡороу була. Горбачевса, тимәк. Ул да бит шулайтып Советтар Союзын "үҙгәртеп ҡороп" ҡараны. Әле һаман, егерме йылдан ашыу ваҡыт үтһә лә, "дөйөм йортобоҙҙоң" бүрәнәләре тырым-тырағай ята. Тимәк, улайтырға ярамай. Ә модернизация, тимәк, ул ярым емерек йорт урынына өр-яңы материалдарҙан, өр-яңы техника ярҙамында, өр-яңы проект буйынса, заманса фекер йөрөткән белемле белгестәрҙең ҡул һәм аҡыл көсө менән, булған һәм булмаған технологияларҙы ҡулланып, унда йәшәйәсәк кешенең бар ихтыяждарын ҡәнәғәтләндерә алған, һыуҙы, электр энергияһын самалап ҡына, үтә экономияль тотонған, ҡышын үҙен-үҙе йылыла, ә йәйге селләлә һалҡында тотҡан, ғөмүмән, рәхәтләнеп оҙон-оҙаҡ йәшәр өсөн бик-бик-бик уңайлы һәм дә, иң мөһиме, арзан булған, тирә-яҡ мөхиткә бер ниндәй зыян килтермәгән йорт төҙөп ултыртыу, тигән һүҙ. Бына бит нимә ул - Модернизация. Матур һүҙ, эйе бит? Мәғәнәһе лә ҡүркәм.

Оптимизация һүҙе лә тәрән ыңғай мәғәнәгә эйә. Уның тамыры "оптимум" - латинса иң яҡшы, йәғни. "Оптимист" тиҙәр бит бер нәмәгә ҡарамай, һәр ваҡыт күтәренке кәйефтә булған, йылмаяҡ кеше тураһында. Оптимизация, тимәк, билдәле бер бурыстарҙы башҡарыу, мәсьәләләрҙе сисеү, маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн яҡшыларҙан иң яҡшыһын ғына, иң уңайлы, иң шәп юлды, планды, мөмкинлектәрҙе һайлап алып файҙаланыу, тигән һүҙ.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ошо ике һүҙ, нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, беҙҙең илдә бер-береһенә ҡаршы килә лә ҡуя. Нисек улай, тип һорайһығыҙмы? Был ике һүҙ илебеҙҙең ике етәксеһенең яратып ҡулланған һәм шуға күрә йыш ҡына ҡабатлаған һүҙҙәре лә баһа, тиһегеҙме? Мәҫәлән, телә ниндәй өлкәлә модернизация үткәреү өсөн иң тәүҙә төплө белемле, яңыса фекер йөрөткән, яңы идеяларҙы ҡабул итеп үҙләштерә алған белгестәр кәрәк. Һаулыҡ һаҡлау өлкәһен генә алайыҡ. Һуңғы йылдарҙа беҙ был тарафта оло уңыштарға өлгәшәбеҙ икән. Үткән аҙнала ғына тап ошо хаҡта оло кәңәшмә булып үтте. Рәсәй кимәлендә шуны билдәләнеләр. Беренсенән, "Сәләмәтлек" милли проекты тормошҡа ашырылған биш йыл эсендә 590 миллиард һум тотонолған, кеше ғүмеренең уртаса оҙайлығы 3,7 йылға артҡан һәм хәҙер 69 йәш тәшкил итә. Тыуым егерме процентҡа тиерлек артҡан, ә үлем 12 процентҡа кәмегән, тип билдәләнде. Яҡындағы бер нисә йыл эсендә һаулыҡ һаҡлау өлкәһенә тағы ла 446 миллиард һум йүнәлтергә планлаштырыла. Шул уҡ ваҡытта Рәсәй һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министры Татьяна Голикова һүҙҙәренә ҡарағанда, Рәсәйҙә ир-егеттәр ҡатынҡыҙҙарға ҡарағанда ун йылға кәмерәк йәшәй. Уларҙың, дөрөҫөрәге, беҙҙең, ир-аттар, уртаса ғүмер оҙайлығы - 62 йыл да 8 ай.

Быға нимә сәбәпсе һуң? Рәсәйҙә врачтар етешмәй. Был хәл айырыуса ауылда һиҙелә. Ауыл ерендә табиптар ҡалаға ҡарағанда өс тапҡырға әҙерәк, ти министр. Миңә ҡалһа, өс түгел, ун өс, хатта егерме өс тапҡырғалыр. Сөнки йыш ҡына меңгә яҡын кеше йәшәгән ауылда ни бары бер врач йәки шәфҡәт туташы ғына бар. Тимәк? Врачтарҙың һанын арттырырға кәрәк булып сығамы? Ул ғына етмәй. Эш хаҡын да бермә-бер күтәрергә кәрәк. Шул уҡ ваҡытта теләһә ниндәй кешене врач итеп ауылға ебәреп булмай ҙа баһа. Уға бит махсус белем кәрәк. Бер нисә йыл уҡытыу, махсус медицина ҡорамалдары, компьютер техникаһы менән эшләргә өйрәтеү мотлаҡ. Был тап ана шул модернизация була инде. Ә бына уҡыу йорттарының һанын, мәктәптәрҙән алып, юғары белем биреү учреждениеларына тиклем кәметеү - оптимизация тип атала. Әле бына тағы уҡытыусыларҙың һанын кәме... ғәфү, йәмәғәт, яңыса һөйләшергә өйрәнмәгәнмен әле, оптимизацияларға торалар.

Был хаҡта дәүләтебеҙҙең икенсе етәксеһе Мәскәүҙәге мәктәптәрҙән береһендә уҡытыусылар һәм ата-әсәләр менән осрашҡанда белдерҙе. Үткән аҙнала булды был хәл. Премьер-министрыбыҙ һүҙҙәренә ҡарағанда, 2015 йылға тиклем мәғариф өлкәһенә 157 миллиард һум биреләсәк. Шул аҡсаның 10,5 миллиарды урта мәктәп өсөн. Ни өсөн тип уйлайһығыҙмы? Юҡ, уҡытыусыларҙың эш хаҡы тураһында әйтмәне ул. Тиҙ арала Рәсәйҙә йөҙгә яҡын махсус пунктар асыласаҡ - уҡытыусыларҙы башҡа һөнәрҙәргә өйрәтер өсөн. Алдағы биш йыл эсендә яҡынса 80 мең уҡытыусы яңы профессияға эйә булырға тейеш. Был, йәмәғәт, оптимизация. Эш нимәлә һуң? Ни эшләп уҡытыусыларҙы һаман ҡыҫҡарталар һәм ҡыҫҡартасаҡтар, тип һорайһығыҙ, моғайын. Эш, баҡтиһән, демография мәсьәләләрендә икән. Баҡтиһән, һуңғы биш йыл эсендә илдә тыуым егерме процентҡа артһа ла (өҫтә ҡарағыҙ әле!) уҡыусылар һаны кәмеүен дауам итә. Шулай булғас, уҡытыусыларҙың да һаны әҙәйергә тейеш бит. Йәмәғәт, бөтәһе лә логикаға ярашлы! Шулаймы? Яңылышмайым да баһа. Улай булғас, һаулыҡ һаҡлау өлкәһенә йүнәлткән аҡса ҡайҙа китә икән һуң?

Бындай мәғәнәһеҙлекте аңлатырлыҡ яңымы, иҫкеме һүҙ ҙә табып булмай әле ҡапыл ғына...



**Таһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөлә Рәсәй кимәлендәге футбол командаһы барлыҡҡа киләсәк. Ул Н.Гастелло исемендәге майҙанда нигеҙләнәсәк. Был турала Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов хәбәр итте. Клуб беренсе лиғаның лайыҡлы командаһы булырға тейеш. Шулай уҡ Рөстәм Хәмитов, "Өфө моторҙар төҙөү берекмәһе" Асыҡ акционерҙар йәмғиәтенә ҡараған Н.Гастелло исемендәге майҙан базаһында параолимпия спорты үҙәге төҙөләсәк, тип билдәләп үтте.

✓Ҡалаларҙа һәм райондарҙа үткәрелгән "Йәш ғаилә - 2010" республика конкурсының беренсе этабы тамамлана. Еңеүселәр республика кимәлендәге смотрҙа ҡатнашыуға дәғүә итә ала. Финалистарҙы жюри ғаилә тормошо, уның мауығыуҙары һәм ижади эҙләнеүҙәрен сағылдырған видеоматериалдар буйынса билдәләйәсәк.

✓9 ноябрҙә Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "Башҡортостан Республикаһында минималь эш хаҡы тураһында" Указға ҡул ҡуйҙы. Указға ярашлы Башҡортостан Хөкүмәтенә социаль-хеҙмәт мөнәсәбәттәрен көйләү буйынса өс яҡлы республика комиссияһы ҡарауына республика территорияһында эшләүсе хеҙмәткәрҙәр өсөн 2011 йылдың 1 ғинуарынан минималь эш хаҡын 5500 һум күләмендә билдәләгән Башҡортостан Республикаһында минималь эш хаҡы тураһында килешеүгә ҡул ҡуйыу хаҡындағы тәҡдимде индерергә ҡушылды.

✓Кировта ҡаяға үрләү буйынса Рәсәй Федерацияһының йәштәр Кубогы булып үтте. Унда илдең 24 төбәгенән 420 спортсы ҡатнашты. БР йыйылма командаһында Салауат, Мәләүез һәм Өфө ҡалаларының Балалар һәм үҫмерҙәр спорт мәктәптәренән йәш спортсылар ҡатнашты. Свердловск өлкәһе менән Санкт-Петербург командаларынан ғына ҡалышып, БР командаһы 1142 бал менән өсөнсө урын яуланы. Шәхси беренселектә Данил Закиров республикаға "көмөш" алып ҡайтты.

✓Башҡортостан Президенты Указы менән әлегә тиклем Өфө хакимиәтенең Ҡала йәшәйешен тәьмин итеү буйынса идаралығының экология һәм тирә-яҡ мөхитте һаҡлау бүлеге начальнигы булып эшләүсе Азат Ҡотләхмәтов республиканың тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры итеп тәғәйенләнде. Президенттың икенсе Указы менән Иҙел Шәйәхмәтов үҙ теләге буйынса тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры вазифаһынан бушатылды.

✓ "Атайым - һәр ваҡыт ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер булған яҡшы дуҫым", - тип белдерҙе Дим районы уҡыусылары районда үткәрелгән атайҙар конференцияһында.



## ЕТЕ РАЙОН

**Октябрь районы.** 20 ноябрҙә "Бергәләп сәләмәт киләсәк өсөн" наркотиктарға ҡаршы программаһы сиктәрендә Рус дәүләт академия драма театрында студент һәм уҡыусы йәштәр араһында сәләмәт йәшәү рәүеше буйынса агитбригадалар конкурсы үтә. Октябрь районының йәштәр сәйәсәте буйынса комитеты был конкурсты "Башҡортостандың баш ҡалаһы йәштәре" ҡала программаһын тормошҡа ашырыу маҡсаты менән ойоштора.

**Орджоникидзе районы.** Районда шәжәрә төҙөү конкурсының финал өлөшө үтте. Еңеүсе дипломы 5-се һөнәрселек училищеһы уҡытыусыһы Әлфиә Йосоповаға тапшырылды. 48-се лицей уҡыусыһы Рәдиф Рахманғолов "Иң тәрән тамырлы шәжәрә" номинацияһында еңеп сыҡты. "Шәжәрә өйрәнеүгә фәнни ҡараш өсөн" номинацияһында Республика башҡорт лицей-интернаты уҡыусыһы Шәфҡәт Ғәбитов еңеүсе булды.

**Калинин районы.** Үҙенең файҙалы эше менән райондың үсешенә булышлыҡ итеүселәр 2010 йылдың 18 ноябренә тиклем "Танылыу" премияһына тәҡдим ителә ала. Унда район предприятиелары, ойошмалары һәм Калинин районында йәшәүсе йәки эшләүсе граждандар ҡатнаша. Тулыраҡ мәғлүмәтте премияның интернет-блогында (priznaniekalin.livejournal.com) алырға була.

**Совет районы.** Районда беренсе тапҡыр паспорт алыусы йәш өфөләләрҙе тантаналы шарттарҙа ҡотлау йолаһы бар. Халыҡтар берҙәмлеге көнө алдынан да 10 йәш кешегә РФ паспорты тапшырыу сараһы үтте. Был сараның төп маҡсаты - үҫмерҙәрҙең аңында "гражданин" төшөнсәһенең, паспорт алыуҙың мөһимлеген аңлатыу, уларҙа илһөйәрлек тойғолары тәрбиәләү.

**Ленин районы.** Футбол - балаларҙы спортҡа ылыҡтырырға, уларҙы үҙ-ара дуҫлаштырырға, командала уйнарға өйрәтергә ярҙам итеүсе уйын төрҙәренең береһе. Бигерәк тә йәш граждандарҙың үҙенсәлекле категорияһы - "ауыр" үҫмерҙәрҙе тәрбиәләүҙә спорт уйындарының әһәмиәте ҙур. Яңыраҡ 24-се мәктәптә "ауыр" үҫмерҙәр, Өфө ҡалаһы Эске эштәр идаралығының 4-се милиция бүлеге һәм Ленин районы хакимиәте хеҙмәткәрҙәре араһында мини-футбол буйынса турнир үтте һәм беренсе урынды үҫмерҙәр алды.

**Дим районы.** "Атайым - һәр ваҡыт ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер булған яҡшы дуҫым", - тип белдерҙе Дим районы уҡыусылары районда үткәрелгән атайҙар конференцияһында. Унда балалар һәм атайҙарҙан тыш, дин әһелдәре, ғалимдар, төрлө белгестәр ҙә ҡатнашты. Конференцияның төп өлөшөнән һуң индивидуаль консультациялар алырға мөмкинлек булды.

**Киров районы.** Үткән аҙнала көҙгө ауыл хужалығы йәрминкәләре тамамланды. Быйыл Киров районы халҡы йәрминкәләр осоронда 1 145 тонна картуф (килоһын 18-22 һум менән), 313 тонна йәшелсә (18-25 һум), 134 тонна ит (150-190 һум), 22 тонна бал (350-390 һум) һатып алған. 4-5 декабрҙә Рабкорҙар урамындағы майҙанда ит йәрминкәләре ойошторолоуы көтөлә.

## БЕЛЕМ УСАҒЫ

# БЕҘ ТӘРБИӘЛӘМӘҺӘК...

## кем тәрбиәләр рухты!

**Республикабыҙға үҙаллылыҡ яулау йылдарында барлыҡҡа килгән БДУ -ның Сибай институты Көньяҡ Урал төбәге халҡы өсөн төп белем усағына әүерелде. Үткән йылдар эсендә "Башланғыс белем биреү методикаһы", "Мәктәпкәсә белем биреү" бүлектәре менән эш башлаған уҡыу йортонда берәм-берәм төрлө бүлектәр асылды. 2000-2001 уҡыу йылында "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте" бүлеге эш башланы, быйыл ул 10 йыллыҡ юбилейын билдәләй.**

Студентты ижади, фәнни яҡтан үҫтереү йәһәтенән бар мөмкинлектәр тыуҙырылған "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте" бүлегендә. "Башҡорт филологияһы" кафедраһы янында "Инеш" әҙәби түңәрәге, "Тулҡын" ғилми-әҙәби, "Дарья" ғилми-лингвистик клубтары уңышлы ғына эшләп килә. Ижад менән шөғөлләнеүселәрҙең институт эскәмйәһендә уҡ китап сығарыуы маҡтауға лайыҡ. Мәҫәлән, "Инеш"тең 10 йыллығына арнап, түңәрәк ағзаларының әҫәрҙәрен туплаған "Инеш тауышы", Рита Хәсәнова менән Раушания Уйылдановаҙың "Бар булмышым хыял ғына..." йыйынтыҡтары, Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә Илгиз Ишбулатовтың "Мин - осар ҡош" китабы донъя күрҙе. Һәләтлеләр күҙ уңынан ысҡындырылмай, таланттар артабан үҫергә көс ала бында. Сибай төбәк яҙыусылар ойошмаһы менән дә яҡшы бәйләнеш булдырылған.

Ун йыл эсендә бихисап эштәр эшләнгән, уңыштар яуланған. Республика кимәлендә генә түгел, Рәсәй буйынса уҙғарылған олимпиадаларҙа призлы урындар яулау бигерәк тә оло мәртәбә. Мәҫәлән, бүлек студенттарының 2003 йылдан алып Ижевск ҡалаһында үткәрелеп килгән "Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре һәм әҙәбиәте", 2008 йылдан Таулы Алтайҙа үткәрелгән "Бөтә Рәсәй төрки телдәре" олимпиадаларында тик призлы урындар яулауы уҡыу йортонда уҡытыу кимәленең юғары ҡуйылыуы хаҡында һөйләй.

Күптән түгел генә Ижевск ҡалаһында үткәрелгән "Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының телдәре һәм әҙәбиәтләре" олимпиадаһында "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте" бүлеге студенттары командаһы уңышлы сығыш яһап, 1-се урын яуланы. Ҡыҙыҡһыныуымды еңә алмай, ошо хаҡта һөйләүен һорап, команда етәксеһе - филология фәндәре кандидаты, доцент Рида Марс ҡыҙы Латыповаға мөрәжәғәт иттем:

- Олимпиада Рәсәй Мәғариф министрлығы тарафынан һигеҙенсе йыл рәттән үткәрелә. Төп маҡсат - Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәрен һәм әҙәбиәттәрен, халыҡ традицияларын өйрәнеү, вуздарҙа тел һәм әҙәбиәттең уҡытылыу кимәлен асыҡлау. Был ярыштың әһәмиәте бик ҙур: студент үҙе алған белемде башҡалар менән сағыштырып ҡарай, өйрәнә. Удмурт, Бүрәт, Таулы Алтай, Ҡаҙан, Мари-Эль кеүек республикаларҙан көслө командаларҙың булыуы олимпиаданың баһаһын бермә-бер арттырҙы, - ти Рида Марс ҡыҙы. - Таныштырыу өлөшөндә беҙҙең сығыш "Иң сағыу таныштырыу" тип билдәләнде. Тел ғилеме, фольклор һәм Рәсәй әҙәбиәттәре буйынса ярыш һәр көндә айырым уҙғарылды. Бында аналитик һәм логик фекерләү, тел һиҙемләүе, тәржемә, әҙәби әҫәрҙәргә анализ яһау, тел бүлектәре буйынса һорауҙарға яуап бирелде. Сибай институты намыҫын Нәфисә Йосопова, Раушания Уйылданова, Алһыу Күсәбаева, Дилә Сәлихова, Нәзилә Ғәлиевалар яҡланы. Ярышҡа әҙерләнгәндә уҡыу йорттарында милли тел, әҙәбиәттең нисек өйрәнелеүен, коллегаларҙың ниндәй йүнәлештә эштәр атҡарғанын асыҡлауҙы, тәжрибә уртаҡлашыуҙы маҡсат итеп алдыҡ. Студенттар менән фольклористика, әҙәбиәт, тел ғилеме буйынса хеҙмәттәрҙе ентекләп өйрәндек. Донъя кимәлендәге ғалимдарҙы һәм уларҙың хеҙмәттәрен уҡып сыҡтыҡ. Шәхси беренселектә Раушания Уйылданова 1 - се, ә Нәфисә Йосопова 2 - се урынға лайыҡ булды. Студенттарҙы олимпиадаға әҙерләүҙә кафедра уҡытыусылары профессорҙар Зыя Әбсәләмов, Ғәҙилә Бүләковалар ҙур тырышлыҡ һалды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халыҡ телендә "Ятып ҡалғансы - атып ҡал" тигән әйтем бар. Ана шул һүҙҙәр Сибай институтының сәмсел студенттарына ҡарата әйтелгән кеүек. Халҡыбыҙ рухын беҙ күтәрмәһәк, кем күтәрер, тип тотона улар һәр эшкә. Буласаҡ уҡытыусылыҡ һөнәренә шулай әҙерләй улар үҙҙәрен.**

**Данил ӘБДЕЛҒАЗИН,**

**БДУ-ның Сибай институты студенты.**



## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә һаулыҡ һаҡлау учреждениеларында янғын хәүефһеҙлеген тәьмин итеү буйынса мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнеүенсә, быйыл ун айҙа ғына Өфөлә 718 янғын осрағы булған, уларҙа 47 кеше һәләк булған. Ә һаулыҡ һаҡлау учреждениеларына килгәндә, улар барыһы ла янғын автоматикаһы менән йыһазландырылған, әммә уларҙың күбеһен яңыртырға кәрәк.

✓Өфөнөң "Тиҙ ярҙам" медицина хеҙмәте ҡала халҡы менән эшләүҙең яңы төрҙәрен булдыра. Күптән түгел "Ҡыҙыу линия"ға 235-94-94 телефонына шылтыратыу, баш табиптың интернет аша ҡабул итеү мөмкинлеге булдырылды. Станцияла шулай уҡ медиктарҙың эше тураһында халыҡтан телефон аша һорау алыуҙар ҙа үткәрелә.

✓Баш ҡалала күкрәк биҙе шешен иҫкәртеү акцияһы бара. Өфөлә быйыл тугыҙ айҙа ғына 365 ҡатын-ҡыҙға күкрәк биҙе яман шеше диагнозы ҡуйылған. Ауырыуҙарҙың 33,9 процентында ҡурҡыныс сир һуңғы стадияла теркәлгән. Теләге булған һәр кем 19 ноябргә тиклем Өфөнөң 21-се, 18-се, 13-сө, 10-сы, 8-се дауаханаларында һәм 4-се бала табыу йортонда, шулай уҡ УЗД кабинетлы ҡатын-ҡыҙҙар консультацияһы булған һәр бер дауалау учреждениеһында маммографик һәм ультратаушылы тикшереү үтә ала. Быны өсөн 276-13-03 телефоны буйынса берҙәм электрон регистратура аша алдан яҙылырға кәрәк.

✓Республикала грипҡа ҡаршы вакцинация дауам итә. Федераль бюджет иҫәбенән 640,3 мең кеше, шул иҫәптән 206600 бала вакцинацияланған. Теләгәндәргә грипҡа ҡаршы вакцинаны аптеканан һатып алырға мөмкин. Рәсәй препараттарының хаҡы уртаса 170 һум тирәһе тора.

✓БДУ-ның теоретик физика кафедраһы аспиранты Илдар Ҡәйүмов тәбиғәт һәм гуманитар фәндәр өлкәһендә грантҡа дәғүә итеүгә "Рәсәй Фәндәр академияһының иң яҡшы аспиранттары" конкурсы еңеүселәре иҫәбенә инде. Конкурс РФ академияһының ғилми учреждениелары һәм илдең төп вуздары араһында үткәрелде. Унда ҡатнашыу өсөн бөтәһе ете йүнәлеш буйынса 1000-дән ашыу заявка бирелде. Илдар Ҡәйүмов "Инженерия һәм техник фәндәр" номинацияһында еңде.

ҮӘТ БИТ ӘЙ!

**2010 йылғы сығарылыш һөҙөмтәләренән һуң тикшереүсе органдар БДИ-ға сираттағы үҙгәрештәр индереү эшен башлап та ебәрҙе. Яҡындағы ике йылда ниндәй үҙгәрештәр көтөлә һуң?**
**Ысынында иһә уҡытыусыларҙың да, уҡыусыларҙың да күбеһе урынлы зарлана: БДИ тирәһендә туҡтауһыҙ ығы-зығы, бөткөһөҙ үҙгәрештәр булып торғанда, нисек итеп бар иғтибарҙы туплап, әҙерләнмәк кәрәк? Яҡындағы ике йылда, мәҫәлән, инглиз теле, әҙәбиәт, физика, химия һәм информатиканан һиҙелерлек үҙгәрештәр көтөлә.**
**Педагогик үлсәмдәр федераль институты 2010 йылғы БДИ һөҙөмтәләрен тикшергәндән һуң, сығарылыш уҡыусылары өсөн мотлаҡ имтихандарҙы "бер аҙ еңелерәк", тип тапты. Эйе, ҡайһы бер бүлектәрҙе ҡайтанан эшләп сығыу кәрәклеге бер кемдә лә икеләнеү тыуҙырмай, әммә әле үк биремдәрҙе мәктәп программаһы кимәлендә хәл итеүе йыш ҡына мөмкин түгел.**
**Эксперттар фекеренсә, мотлаҡ фәндәрҙең ҡайһы бер өлкәләрендә уҡыусыларҙың белеме һай. Мәҫәлән, математикала был геометрия бүлеге һәм математик анализ. Был ғәжәп тә түгел: мәктәптә геометрия үтелһә лә, "матан"ды фәҡәт вузда ғына өйрәнә башлайҙар. Шуға күрә лә анализ буйынса заданиеларҙы уҡытыусылар урынһыҙ, тип иҫәпләй.**

# ИМТИХАН БИРӘМ, ТИҺӘҢ...

## репетитор эҙлә



### Информатика

Компьютер менән бәйле практик фән практик күнекмәләр индереүҙе талап итә. Был шулай булырға тейеш тә, тест биремдәре генә абитуриенттың әҙерлек кимәлен асыҡлап бөтөрә алмай. Тикшереүсе эксперттар был фән буйынса БДИ биремдәрен ҡатмарлаштырырға уйлай, "йәмғиәтебеҙ үҫеше шуны талап итә", ти улар. Был осраҡта информатиканан биремдәрҙе йыл һайын һәм иң һуңғы ваҡытҡа самалап үҙгәртә торорға кәрәк буласаҡ, тик быны нисек итеп мәктәп программаһы менән яраштырырға һуң? Был мөмкин түгел, шуның өсөн репетиторҙарҙа шөғөлләнергә кәрәк буласаҡ, ти белгестәр.

### Тел һөйләшер өсөн кәрәк

БДИ тәжрибә рәүешендә үткәрелгән саҡта сит телдән имтиханда телмәр өлөшө бар ине. Был аңлашыла ла: телдән күнекмәһеҙ тел дә юк. Аҙаҡ был өлөш төшөп ҡалғайны, быйыл эксперттар уны ҡайтанан иҫәнә төшөрҙө. БДИ-ла тулыһынса "һөйләшеү"ҙе 2012 йыл имтиханына индермәкселәр, ләкин ул киләһе йыл имтиханында ла урын алыуы ихтимал.

### Тәбиғи фәндәр еңелләшә

Ә бына тәбиғи фәндәрҙән еңелерәккә тура киләсәк: быйыл мәктәпте тамамлап сығыусыларҙың сирек өлөшө генә физика һәм химиянан имтиханға әҙер булыуы асыҡланды. Тимәк, ябайлаштырыу кәрәк йәки төп иғтибарҙы был фәндәрҙең башҡа бүлектәренә йүнәлтергә кәрәк. Үлсәмдәр институты советының ултырышы буйынса отчетта күрһәтелеүенсә, физика-техник йүнәлештәге вуздарға физиканы нигеҙ кимәлендә өйрәнгән һәм юғары мәктәп программаһын уңышлы үҙләштереүгә әҙерлеге булмаған абитуриенттар килә.Һығымта: БДИ-ны ябайлаштырырға, уҡыусыларҙы мәктәптә яҡшыраҡ әҙерләргә. Нисек кенә булмаһын, эксперттар бер төрлө кәңәш бирә: алдан әҙерләнергә, бөтә мөмкинлектәрҙе лә файҙаланырға. БДИ-ны нисек кенә үҙгәртһәләр ҙә, шуныһы асыҡ: мәктәп программаһы ғына етмәйәсәк.

### Реформалар

БДИ-ла нимәләр үҙгәрәсәк? Беренсе өлөш ҡыҫҡартыласаҡ. А өлөшөнөң файҙаһыҙ булыуы тураһында эксперттар күп һөйләй. Был блок имтихан биреүсегә лә, тикшереүселәргә лә бер ни бирмәй. Эксперттар иҫәпләүенсә, дөрөҫ булмаған варианттарҙы алып ташлап та был өлөштө уңышлы хәл итергә мөмкин.

Имтиханды ике өлөшкә бүлергә. Тәүге этап - аттестат кәрәк булғандар өсөн, икенсеһе - вузға инергә теләүселәр өсөн.

Телдән имтихан индерергә. Ҡайһы бер фәндәрҙән башҡаса мөмкин дә түгел. Был сит телдәр һәм тарих. Күп кенә гуманитар фәндәрҙе тапшырғанда уҡыусының бирелгән темаға фекер йөрөтә белеү һәләтен тикшерергә кәрәк.

Практика өҫтәргә. Информатика, черчение кеүек фәндәрҙән тестар менән генә тикшереү мөмкин түгел. Әҙәбиәттән иншаны кире ҡайтарыу. Был фәндә тапшырғанда белемде тикшереүҙең иң ышаныслы юлы - ошо классик вариант.

### Һандар һөйләй

- 2010 йылда 8,5 мең уҡыусы БДИ-нан мотлаҡ имтихандарҙы тапшыра алмаған һәм аттестатһыҙ ҡалды.
- 2010 йылда Рәсәйҙә бөтәһе 877 мең кеше БДИ тапшырҙы.
- 2010 йылда 2822 БДИ тестары һөҙөмтәләре иң юғары 100 балл менән баһаланды.
- Вузға тиклем белем биреү үҙәктәрендә бер фәндән БДИ-ға әҙерлектең уртаса хаҡы - 10000 һум.
- 2010 йылда Рәсәй буйынса рус теленән БДИ-ның уртаса күрһәткесе 58 балл булды.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

ҺОРАУ-ЯУАП

### МӘРХҮМДЕҢ БУРЫСЫН КЕМ ТҮЛӘР?

**Ике йыл элек ҡапыл ғына улым мәрхүм булды. Хәҙер банктан миңә, уның бурысы бар, тип шылтыраталар. Әсәһе булараҡ, поручитель түгелмен, был йәһәттән бер ниндәй документтарға ҡул ҡуйманым, түләү хаттары алманым. Шулай ҙа минән түләү талап итә алалармы?**

- Кредит килешеүенә ярашлы, кредит түләнмәгән осраҡта уның өсөн үҙ аҡсаһы менән поручитель яуап бирә. Шулай уҡ банк кредит килешеүе ғәмәлдә булған осорға заемды тәьмин итеү өсөн заемсының мөлкәтен асыҡлай ала.

РФ Граждандыҡ кодексының 1-се бүлегендә 418, 1175 һәм 367-се статьяларына ярашлы, вафаты менән бәйле бурыслының йөкләмәһе туҡтатыла һәм поручитель яуаплылығы (бурыс түләү) уның билдәләнгән тәртиптә мираҫҡа хоҡуҡ алған варисҭарына йөкмәтелә.

### АЙЫШЫНА ТӨШӨНӨҮ КӘРӘК

**Бәлиғ булмаған ике улым бар. Күрше балалары менән уйнаған саҡта йыш ҡына сәкәләшеп китәләр. Бер ҡатын, балаларын яҡлап, улдарымды административ яуаплылыҡҡа тарттырыу менән янай. Былдай яуаплылыҡҡа балалар нисә йәштән тарттырыла?**

- РФ Администртив хоҡуҡ боҙоуҙар кодексының 2.3-сө статьяһына ярашлы, административ тәртип боҙоусының 16 йәше тулған осраҡта ул яуаплылыҡҡа тарттырыла. Шуны ла оноторға ярамай: эштең айышына төшөнөп, 16-нан 18 йәшкә тиклемге хоҡуҡ тәртибен боҙоусы үҫмер хаҡындағы мәғлүмәттәр иҫкә алынып, бәлиғ булмаған йәштәгеләр һәм уларҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса комиссия тарафынан бәлиғ булмаған йәштәгеләр хоҡуғын яҡлау тураһындағы федераль законда ҡаралған иҫкәртеү саралары ҡулланылып, үҫмер әлеге яуаплылыҡтан азат ителеүе лә ихтимал.

### ХУЛИГАНЛЫҠ НИМӘ УЛ?

**Законда ваҡ хулиганлыҡ төшөнсәһе нимәне аңлата?**

- РФ Административ тәртип боҙоуҙар кодексының 20.1. статьяһында аңлатылыуынса, ваҡ хулиганлыҡ - ул йәмәғәт урындарында оятһыҙ һүгенеп, граждандарҙы кәмһетеп, уларға бәйләнеү һәм йәмғиәткә ихтирамһыҙлыҡ күрһәтеп, йәмәғәт тәртибен боҙоу, шул уҡ ваҡытта сит мөлкәткә зыян килтереү. Быйың өсөн 500 һумдан мең һумға тиклем штраф түләтеү йәки 15 тәүлеккә ҡулға алыу ҡаралған.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

### Организмды нығытыу



*10 грамм әлморон емеше, миләш емеше, ҡарағат алып, ҡайнар һыуҙа төнәтеп, көнөнә ике тапҡыр яртышар стаканлап эсергә.

*20 грамм кесерткән япрағы, 40 грамм миләш емешен ярты литр ҡайнар һыу менән бешекләп төнәткәс, көнөнә 3 тапҡыр яртышар стаканлап эсергә. Дауалау курсы - 10 көн.

Иҫкәрмә: составында кесерткән булған төнәтмәне оҙай эсергә ярамай, сөнки ул ҡанды ҡуйырта.

### Быуындар һыҙлағанда

Быуындар ауыртҡанда гәрсискә тоҙ ҡушып, араҡы менән бутап, бутҡа хәленә еткергәс, кизе-мамыҡ сепрәк аша һыҙлаған урынға һалырға. Алдан быуындарҙы ышҡып йылытырға онотмағыҙ. 10-15 минуттан һыҙлау баҫылып ҡалыр. Быуындар һыҙлауынан түбәндәге төнәтмә лә яҡшы ярҙам итә. 1-әр балғалаҡ окопник (ҡыҙғаныҫҡа күрә, башҡортса атамаһы бер һүҙлектә лә осрамай) һәм һыуһын (сабельник) үләндәрен алып, 1 стакан ҡайнар һыу менән төнәткәс, ашар алдынан көнөнә өс тапҡыр эсергә.

### Һөт төшөрөү

Бала имеҙгән әсәнең һөтө аҙ булһа, түбәндәге төнәтмәне ҡулланып ҡарағыҙ. 2 балғалаҡ әнис орлоғо (укроп огородный), 1 балғалаҡ фенхель емештәре, 1 балғалаҡ мәтрүшкә үләнен ике стакан ҡайнар һыуҙа төнәткәс, көнөнә ике тапҡыр 1-әр стаканлап эсергә. Әгәр ҙә имеҙеүҙе ташларға йыйынһағыҙ, һөт бүленеүен кәметеү өсөн: 2-шәр балғалаҡ ҡомалаҡ сәскәһен һәм шалфей үләнен алып, булһа, 2 балғалаҡ грек сәтләүеге япрағын өҫтәп, 1 стакан ҡайнар һыу менән төнәтеп, бер нисә көн дауамында көнөнә ике-өс тапҡыр эсергә.

### Диабет

Ҡыҙҡбыуын (хвощ полевой), бәпкә үләне (спорыш), эре кесерткән (крапива двудомная), көтөүсе муксаһы (пастушья сумка) үләндәрен 10-ар грамм алып, стакан ярым ҡайнар һыу менән төнәтеп, стакандың өстән бере өлөшө күләмендә көнөнә 3 тапҡыр эсергә.

Етен орлоғо һәм һоло һаламын 25-әр грамм алып, тәүге варианттағы кеүек әҙерләп эсергә.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**




# ОЛОЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

## Дүртенсе өгөт

Ҡөрьән шәрифте үҙегеҙгә иман итеп, һәр ваҡыт Аллаһы Тәғәлә хәҙрәтенә оҡшаған эштәр эшләгеҙ. Харамды - харам тип, хәләлде хәләл тип белегеҙ. Донъя һеҙҙе ҡыуалаһа, һеҙ донъяны ҡыумағыҙ;йәғни донъяғыҙ өсөн әхирәтегеҙҙе һәләк итмәгеҙ. Юғиһә дөрөҫ ниәт менән кәсеп итеү һәм байлыҡ йыйыу донъя ҡыуыу түгелдер. Дөрөҫ һүҙле булығыҙ. Булмай ҡалған нәмәләр өсөн үкенмәгеҙ. Бер-берегеҙ менән татыу йәшәгеҙ. Боронғо халыҡтарҙан ғибрәт алығыҙ. Киләсәк көндәрегеҙҙе уйлағыҙ. Дөрөҫ һәм дөрөҫ булмаған нәмәләр өсөн ант итмәгеҙ. Йәнәб-и Аллаһтың исемен шаһит итер өсөн хатта бөтөн донъяның ҡиммәте етмәҫ. Ислам әһелдәренә зарар килтерәсәк нәмәләрҙән һаҡланығыҙ. Ғәҙәттә оят булған эштәрҙе йәшереп эшләмәгеҙ. Әйтергә ярамаған һүҙҙәрҙе тикшермәгеҙ. Һәр ишеткән һүҙҙе һөйләмәгеҙ, һәр һүҙгә ҡаршы тормағыҙ. Үс алырға көсөгөҙ етһә лә, ғәфү итегеҙ, асыуығыҙҙы йотоғоҙ. Аллаһы Тәғәлә бүләк иткән ниғмәттәрҙе ҡәҙерһеҙләмәгеҙ. Бер ерҙә низағ һәм тауыш сыҡһа, өндәшмәгеҙ, һуғыш булһа, ул ерҙән башығыҙҙы бер тарафҡа алып китегеҙ. Алдығыҙҙа кеше ғәйебен һөйләүселәрҙең башҡаларға барып, һеҙҙең ғәйебегеҙҙе һөйләүҙәренән һаҡланығыҙ. Кемдән ярҙам һораһағыҙ - уның тиңдәше булырһығыҙ, кемгә мохтаж булһағыҙ - уның әсире булырһығыҙ, кемгә изгелек күрһәтһәгеҙ - уның әмире булырһығыҙ. Һынамаҫтан элек һис кем хаҡында яҡшылыҡ менән гуаһлыҡ бирмәгеҙ һәм хәлен белмәгән ваҡытта һис кемдең хәбәрен дөрөҫ тип дәғүә итмәгеҙ, эстәрен яҡшы аңламаған кешеләрҙе тыштан күреү менән хөкөм итмәгеҙ. Дуҫ эҙләгәндә ярҙам итеүсе, раҫ һөйләүсе, изгелектәрегеҙҙе күреүсе, яманлыҡтарығыҙҙы дәфен итеүсе, ҡайғы һәм шатлыҡтарығыҙҙы уртаҡлашыусы кешеләрегеҙҙе табығыҙ. Бындай сифаттары булмағандарҙың дуҫлыҡтарынан файҙа сыҡмаҫ. Мал һәм дәүләтегеҙ менән халыҡтарҙы ризаландыра алмаһағыҙ, холҡоғоҙ менән ризалатығыҙ. Яҡшы кешенең ас һәм уҫал кешенең туҡ ваҡыттарынан һаҡланығыҙ. Боҙоҡ холоҡло кешеләргә йәр, юлдаш булмағыҙ, үҙегеҙ һис һиҙмәйенсә уларҙың холоҡтарын алырһығыҙ. Бер кешенең аяғы тайһа, шатланмағыҙ. Бындай хәл үҙегеҙгә лә килеүе ихтимал. Әҙәпһеҙ кешегә юлдаш булмағыҙ, иҫерек менән һөйләшмәгеҙ. Динебеҙ өсөн Аллаһы Тәғәлә хәҙрәтен риза итерлек юл менән һәм донъяғыҙ өсөн тормошоғоҙҙо төҙәтәсәк рәүештә йөрөгөҙ. Һис бер нәмә өсөн үкенмәйенсә донъянан айырылығыҙ, рәхәтлек иһә шунда табылыр.

**(Дауамы бар).**

*АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ*

# СИТ ИЛ ЙӘНҺҮРӘТЕНӘН...

## баланды мөмкин тиклем ситләштер

**Баландың ниндәй йәнһүрәт ратканын беләһеңме, әллә быны менән бөтөнләй ҡыҙыҡһынмайһыңмы? Ә бына психологтар фекеренсә, бөгөн зәңгәр экрандарҙан күрһәтелгән заманса йәнһүрәттәрҙең күбеһе бала һаулығы өсөн ҙур зыян килтерә. Бер туҡтауһыҙ анимацион продукция емештәренә текәлеп ултырыу баланың аҡыл үҫешен тотҡарлап ҡына ҡалмай, уның психологик сәләмәтлеген дә юҡҡа сығара.**

### Бала аңына яраҡлы булһын

Әлбиттә, бөгөн телевизорҙан күрһәтелгән йәнһүрәттәр араһында зауыҡ йәһәтенән дә, балалар психологияһы күҙлегенән дә уңышлы тип табылғандары байтаҡ ҡына. Мәҫәлән, Америка йәнһүрәте "Уйынсыҡтар тарихы"нда ("История игрушек") персонаждарҙың хәрәкәттәре, мимикалары төрлө-төрлө һәм улар бик яҡшы итеп төшөрөлгән. Йәки "Чучу" йәнһүрәтен алып ҡарайыҡ. Психологтар әйтеүенсә, унда бала өсөн бик мөһим булған образдар һәм тойғолар һүрәтләнгән.

Әммә Хәҙерге балалыҡ институты психологтары фекеренсә, был йәнһүрәттәрҙең ҡайһы берәүҙәре бала үҫешенә кире йоғонто яһай, мәҫәлән, бындай баланың наркоманлыҡҡа, ҡомарлы уйындарға тиҙерәк ылығыуы билдәле. Бигерәк тә бәләкәс балаларға йәнһүрәттәр күрһәтеүҙән тыйылыу мөһим. Иртә балалыҡ осороноң төп функциялары формалашмайынса, йәғни сабыйығыҙ ҡулына берәй әйбер тотоп атлап китеп барған саҡта күрә һәм ишетә башламайынса, уны телевизор алдына бер хәрәкәтһеҙ ултыртып ҡуйыу насар эҙемтәләргә килтерә. Баланың хәрәкәт итеү, телмәр функцияһы боҙола, тимәк, үҫеш яғынан тиҫтерҙәренән артта ҡала. Етмәһә, ике йәш ярымдан өс йәшкә тиклемге балаға ҡаралы-аҡлы йәнһүрәт ҡарау яҡшыраҡ, сөнки төрлө төҫтәр баланың иғтибарын тарҡата һәм ул хәрәкәт артынан күҙәтеп өлгөрмәй.

Өлкәнерәк балаларға ла йәнһүрәттәрҙе һайлап ҡына ҡаратыу мөһим. Кадрҙарҙың, етмәһә, һүрәттәрҙең сағыулығы юғары тиҙлектә алышыныуы баланың донъяны үҙләштереү мөмкинлеге сиктәренән үтеп китә. Мәҫәлән, "Покемон" фильмындағы уттың ҡапыл һәм йыш үҙгәреп тороуы күп балаларҙы эпилептик быума хәленә килтергәнлеге билдәле.

Баланы алдыңа ултыртып, әкиәт уҡығанда ҡайһы урында тауышты көсәйтергә, ҡайһы урында яйыраҡ уҡырға икәнлеген яҡшы тойорға була, ә йәнһүрәттә быны контролдә тотоуы ауыр. Әгәр ҙә бала экранда барған ваҡиғаларҙы аңлап өлгөрмәһә, ул нервылар көсөргәнеше кисереүе ихтимал.

### Сәнғәт төрө булараҡ...

Барыһы ла белмәйҙер, әммә совет осоронда бар йәнһүрәттәрҙе лә төрлө күҙлектән тикшереп кенә экрандарға сығаралар ине. Ул заман йәнһүрәттәре бик ябай булһа ла, совет анимацияһы бала психикаһы өсөн яраҡлы йәнһүрәттәр генә сығарҙы һәм ул сабыйҙы изгелеккә, матурлыҡҡа өйрәтте. Бала тап йәнһүрәт аша оло сәнғәт менән танышты, йәғни ул саҡта йәнһүрәт ысын сәнғәт өлгөһө иҫәпләнә ине.

Һуңғы ике тиҫтә йыл эсендә был хәл тулыһынса үҙгәрҙе. Бөгөнгө телеэфир, видео һәм кино баҙары көнбайыштан килтерелгән сифатһыҙ продукция менән тулған. Рәсәй мультипликаторҙары ла бала аңының үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып бармай. Һөҙөмтәлә, балалар геройҙарҙың индивидуаль йөҙө лә булмаған, сюжетһыҙ, мәғәнәһеҙ фразалар менән тулған йәнһүрәттәр ҡарарға мәжбүр.

Был турала ла, телевизор алдына ултыртып ҡуйған балаһының был йәнһүрәттән файҙа алмаҫын да ата-әсәләр яҡшы белә. Тик сәғәт ярым эсендә балаға артыҡ зыян килмәҫ, тип хаталана улар.

### Нисек көрәшергә...

Йәнһүрәт ҡарауҙың психик тайпылыштарға килтергән осраҡтары, бәхеткә күрә, һирәк осрай. Тик бала психикаһына һәм аҡыл үҫешенә килгән зыян шунда уҡ беленмәҫкә лә мөмкин икәнен онотмағыҙ. Сифатһыҙ продукция баланың телмәренә һәм хәрәкәтенә генә йоғонто яһап ҡалмай, уның тәьҫире аҫтында баланың донъя һәм кешелек ҡиммәттәре тураһындағы фекере формалаша, артабан уйналасаҡ уйындар уйлап табыла. Бынан тыш, тамашасынан интеллектуаль һәм эмоциональ күтәргәнеш талап итмәгән экшн (инглиз һүҙе shoot - "атыш"), бер-бер артлы үҙгәреп торған мажаралар баланы шул тиклем үҙенә йәлеп итә, ул тиҙҙән уларһыҙ бер көн дә тора алмаясаҡ.

Был проблеманы аңлағандан һуң, "дөрөҫ булмаған" йәнһүрәттәр менән беҙҙә лә, сит илдәрҙә лә көрәш башланды. Мәҫәлән, Англияла, Австралияла, Норвегияла, Канадала балалар анимацияһының матур йолаларын терғеҙеү маҡсатында яҡшы әҙәби сюжетлы һәм сифатлы графикалы йәнһүрәттәр етештерәләр. Рәсәйҙә лә был эш яйға һалына, балалар аниматографияһына арналған оҫталыҡ дәрестәре үткәрелә, бәлки, тиҙҙән экрандарға яңы йәнһүрәттәр ҙә сығыр әле. Ә әлегә ата-әсәләргә балаларға йәнһүрәттәрҙе һайлап ҡына күрһәтергә кәңәш итә психологтар. Иң яҡшыһы - йәнһүрәтте балағыҙ менән бергә ҡарағыҙ, сөнки бәләкәсегеҙҙең сәләмәтлеген һеҙҙән башҡа бер кем дә ҡайғыртмаясаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Дөрөҫ" йәнһүрәттә персонаждарҙың хәрәкәте һәм мимикаһы яҡшы эшләнергә тейеш, сөнки экран - ул көҙгө һәм бала мотлаҡ ундағы геройға оҡшарға тырышасаҡ. Йәнһүрәттә дуҫлыҡ, мөхәббәт кеүек хистәр менән бергә йәлләү, ҡурҡыу хистәре лә булыуы яҡшыраҡ, шуға ла билдәле "Том и Джерри" кеүек йәнһүрәттәрҙе күрһәтеүҙән баш тартығыҙ. Ҡайһы бер йәнһүрәттәр донъяны тик ҡараңғы төҫтәрҙә генә күрһәтә, унда персонаждар бер кемдән дә яҡлау тапмай. Фильмдың мотлаҡ позитив булыуы талап ителмәй, тик унда өмөтһөҙлөккә урын булмаһын, сөнки шул саҡта ғына уларҙы изге күңелле, ярҙамсыл һәм мәрхәмәтле итеп тәрбиәләй алыу мөмкиндер, моғайын.**

**Ләйсән ДАЯНОВА әҙерләне.**



✓ Үҙҙәренең 13 быуын шәжәрәһен белгән "Сөрсә"ләр, "Сирмештәр", "Кәмәкәйҙәр" зат араһы, әруах олаталарының рухтарына тоғролоҡ һаҡлап, ауылдың ҡороуына юл ҡуйманы.



ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ТАМЫРЫҢ НЫҠ БУЛҺА...

## олоноң бирешмәҫ

**Мәҡәләмде күренекле шағир Ҡәҙим Аралбайҙың шиғри һүҙҙәре менән башлаһам, нәҫел-нәсәбә шәжәрәһен өйрәнеүҙең әһәмиәтен аңламағандар өсөн тәьҫирле булыр, тип уйлайым.**

***Шәжәрә - ул сал тарихҡа бағыр тәҙрә,***
***Күҙ яҙҙырһаң, шул тәҙрәнән атыр йәҙрә,***
***Ал бер үрнәк - бал ҡорттары төҙөй керәҙ***
***Һин дә ятма: ҡор оянды, үр шәжәрә! -***

**тип бик урынлы өндәй халҡыбыҙҙы шағир. Ысынлап та, беҙ аҙ һанлы милләттәрҙе бөтөрөү сәйәсәте хөкөм һөргән осорҙа, эре калибрлы пушканан атылғандай һеңгәҙәп, ата-олатайҙарыбыҙҙы ғына түгел, үҙебеҙҙе үҙебеҙ онота яҙҙыҡ. Ярамһаҡ-монафиҡтар ата-олатайҙар яҙмаларын, улар төҙөгән шәжәрәләрҙе юҡ итте. Репрессияланғандарҙың нәҫел-нәсәбәләре эҙәрлекләүҙән ҡурҡып, фамилияларын үҙгәртергә мәжбүр булды.**



Халҡыбыҙҙың зыялылары тарафынан төҙөлгән шәжәрәләр, әһәмиәтле яҙмалар баҫтырырға мөмкинлек тыуҙырылғанға тиклем һандыҡ төптәрендә һаҡланды. Ниһайәт, Аллаға шөкөр, республика етәкселегенең 2006 йылдың 10 май айындағы 121-се һанлы ҡарары нигеҙендә нәҫел-нәсәптәрҙең шәжәрәләре өйрәнелә башлағас, филология фәндәре кандидаты Миңлеғәле Нәҙерғолов әйтмешләй, зат-аралаpҙа ғәм тарала башланы. Һуңғы йылдарҙа ауылдарҙа бер-бер артлы үткәрелгән "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар", "Шәжәрә" байрамдары ауылдаштарҙың, нәҫел-нәсәбәләрҙең үҙ-ара ҡатнашып-тупланып йәшәүенә килтерҙе, ситтә йөрөгәндәрҙең күңеленә ғәм, сәм һалынды, туған-тыумасаларына ҡарата тартымлылыҡ, яғымлылыҡ тойғолары уятылды. Ҡыҫҡаһы, был ике байрам сараларында ғәйәт әһәмиәтле эш башҡарыла. Тарихты, олатайҙар быуынын яҡшылап өйрәнгәндәр яҡын туғандары менән ҡоҙа-ҡоҙағыйлашыуҙан арына, тоҡомонда күренекле дин әһелдәре булғанын белгәндәр иһә алама ғәҙәттәренән арынырға тырыша. Бөрйән районының Үрге Нөгөш ауылы 1960-1970 йылдарҙа перспективаһыҙ ауылдар рәтенә индерелеп, юҡҡа сығыуға дусар ителә яҙҙы. Ауыл күрке - тиҫтәләгән йылдарса мәктәп, ҡыҙыл мөйөш функцияһын үтәгән мәсет бинаһы һатып ебәрелде. Юл булмау сәбәпле, балалар уҡытыу ауырлашҡас, күптәр 11 йыллыҡ мәктәбе булған ауылдарға күсенде. Ауыл халҡы өс тапҡырға кәмене. Әммә үҙҙәренең 13 быуын шәжәрәһен белгән "Сөрсә"ләр, "Сирмештәр", "Кәмәкәйҙәр" зат араһы, әруах олаталарының рухтарына тоғролоҡ һаҡлап, ауылдың ҡороуына юл ҡуйманы. Ошо өс нәҫелдең тырышлығы менән ауылда өс йыл һайын Нөгөш йылғаһы буйлап үткән туристарҙың иғтибарын йәлеп итерлек "Шәжәрә", "Һаумыһығыҙ ауылдаштар" байрамы үткәрелә. Йыйынға ситтә йөрөгәндәрҙең яртыһы ғына ҡайтһа ла, 300-400 кеше йыйыла. Мәскәү өлкәһенән килгән туристарҙың шундай байрамды тамаша ҡылғандан һуң: "Вы, башкиры, молодцы, себя сохранить умеете", - тип әйтеп китеүен ғорурланып һөйләйҙәр Үрге Нөгөштә. Эйе, ун ике балалы Зәкирә һәм Әҡсән Иҫәнамановтар, унар балалы Сәбилә менән Сабирйән Иҫәнамановтар, Гөлнур менән Хәбир Ғәлиев, туғыҙар балалы Миңныя менән Рәсүл Аҫылғужин, Хәмдиә менән Мөҙәрис Әхтәмов кеүек шундай тамырлы аҫаба заттар бар сағында был ауыл да, милләт тә йәшәйәсәк! Бөрйән районында берҙән-бер юлһыҙ ауыл ул. Уларға заманса юл һалып, ауылдың тергеҙелеүенә ярҙам итеү Бөрйән районы етәкселәренең намыҫында.

Перспективаһыҙ ауылдар иҫәбенә индерелеп, юҡҡа сыға яҙған ауылдарҙы тергеҙеүгә булған ынтылышты Ишембай районында ла һиҙемләйһең. Ялтыран һәм Кәбәс ауылдарының яҙмышы Үрге Нөгөш ауылыныҡы кеүек үк аяныслы ине. Балалар уҡытыуға мөмкинлек булмауҙан, күптәр Көҙән, Ҡолғона ауылына күсенде. Ә шулай ҙа еренә ереккән, әрһеҙ тормош ауырлыҡтарына бирешмәгән ир-уҙамандарҙың булыуы ҡыуаныслы. 3 июлдә ошо ауылдарҙа "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар" байрамы үтәсәген хәбәр иткәстәр, "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге рәйесе Риф Иҫәнов менән шунда юлланабыҙ. Халыҡ һәүетемсә йыйылған, тирмәләр ҙә хәс ҙур ауылдарҙағыса ҡоролған. Боронғо йола нигеҙендә аш-һыу әҙерләнгән. Барыһында ла шат, көләс, ҡунаҡсыл йөҙҙәр. Улар күңелендә бөгөн икеләтә байрам. Киләсәктә ҡалын итеп түшәлгән таш юлдан йөрөйәсәктәр. Ә бит 1970-1980 йылдарҙа был яҡтарҙан тик йәйәүләп кенә үтергә мөмкин ине.

Ауылдарҙы тарҡатыу сәйәсәте барған осорҙа йөҙәрләгән ауылдарҙың юҡҡа сығыуында шунда йәшәгән халыҡтың да ғәйебе бар бит. Тарихи шәхестәрҙең тормош юлына күҙ йүгертһәң, уларҙың теләһә ниндәй шарттарҙа ла белем алып, халҡына хеҙмәт иткәнлегенә шаһитбыҙ. Тимәк, "һайт тигәнгә тайт" тип, балалар уҡытыуға һылтанып, олатайҙар нигеҙен ҡалдырып китеү - еңел аҡыллылыҡ. Тәбиғәттән һәләтле кеше ниндәй генә шарттарҙа ла белем алыу юлын таба. Нисек кенә булмаһын, халҡыбыҙ улдары һәм ҡыҙҙары ата-бабалар нигеҙен ҡоротмау һәм һаҡлау тураһында һәр саҡ уйларға тейеш. Юҡһа, кендек ҡаны тамған еребеҙгә хужа булырға теләүселәр табылып тора. Кәбәс менән Ялтыран ауылдары эргәһендә - Үрек йылғаһы буйындағы "Һыу сыҡҡан" яланында Мәскәү чиновниктарының йорт төҙөп, тәбиғәт ҡосағында ял итеп, кәйефләнеп йәшәүе тураһында һөйләгәйнеләр. Был урындағы халыҡты ла, барлыҡ башҡорт зыялыларын да һағайтырға тейеш. Хозур тәбиғәтле ер-һыуҙарыбыҙға, ялан-урмандарыбыҙға сит бауырҙар хужа булып алһа, яландарыбыҙҙан еләк йыйыу, урмандарыбыҙҙан сыбыртҡы һабы ҡырҡып алыу мөмкинлеген дә юғалтыуыбыҙ бар бит...

Ошоларҙы уйлап, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты ҡабул иткән программаға ярашлы, бөтөп барған ауылдарҙы тергеҙеү өлкәһендә әүҙем эш алып барырға тейешбеҙ. Сөнки ауылдарҙы тергеҙеү - милләтте үҫтереү, тергеҙеү, туплау тигән һүҙ ул.

**Зөфәр ТОЛОМҒУЖИН.**

ВӘЛИДИ КӨРӘШТӘШТӘРЕ



# ХАРИС ТУЙМАҠАЕВ

**Харис Туймаҡаев - 1918 йылда Башҡорт армияһын ойоштороуҙа әүҙем ҡатнашҡан офицерҙарҙың береһе. Тыумышы менән Троицк ҡалаһынан. Зәки Вәлиди уны сығышы менән Башҡортостандың Күгәрсен районынан, тип яҙа.**

Харис Туймаҡаев Беренсе донъя һуғышына алынып, унда хәрби мәктәп тамамлап, офицер чинын алып ҡайтҡан булһа кәрәк. 1918 йылдың майында Силәбе ҡалаһында большевиктар власы ҡолатылып, Чехословак корпусы ҡулына күскәндән һуң, бында Силәбе башҡорттарынан Мосолман ирекле отряды ойоштороla. Отрядҡа поручик Х. Туймаҡаев етәкселек итә. Оҙаҡламай Силәбе ҡалаһында Башҡорт хөкүмәте милли ғәскәр төҙөү эшенә тотона. Әлеге Мосолман ирекле отряды нигеҙендә Башҡортостан автономияһының тәүге ғәскәри берәмеге - 1-се Башҡорт пехота полкы ойошторола. Уның командиры итеп поручик Туймаҡаев тәғәйенләнә.

1-се Башҡорт полкы 1918 йылдың июнь-июль айҙарында ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышта ҡатнашып, аҡтар алдында үҙен һуғышсан милли ғәскәр итеп таныта. Был, үҙ сиратында, Башҡорт хөкүмәтенә башҡорт ғәскәрен артабан үҫтерергә, яңы полктар ойошторорға мөмкинлек бирә.

1918 йылдың август башында 1-се полк Башҡорт хөкүмәте менән бергә Ырымбурға килеп урынлаша. 11 августа Ырымбур хәрби округы ғәскәрҙәре командующийы Дутов башҡорт полкын килеп ҡарап китә. Башҡорт һалдаттары араһындағы тәртип һәм хәрби рухтың юғары кимәлдә булыуын күреп, ул һоҡланыуын йәшермәй. Полк командирына рәхмәтен белдереп, иртәгеһенә үк түбәндәге фарманды сығара: "

**ПРИКАЗ**
**по Оренбургскому военному округу**
**№ 107- 12 августа 1918 г. гор. Оренбург**
**(по отделу Генерал-Квартирмейстера)**

**11 августа я посетил только что прибывший в г. Оренбург 1 батальон 1-го Башкирского полка, расквартированный на Маячной горе, в лагере 2-го кадетского корпуса. В момент моего прибытия батальон обедал. Из всего виденного мною в батальоне, я вынес самое отрадное впечатление. Несмотря на праздник, все г.г. офицеры были при батальоне. Солдаты хорошо одеты, имели отличный воинский вид. На приветствие отвечали сноровисто и умело. Меня порадовала выправка и молодцеватость солдат Башкирского полка. Не оставляет желать лучшего и внутренний распорядок в батальоне: помещения содержатся в чистоте, в канцелярии полный порядок, во всем чувствуется опытная и твердая рука командира полка заботящегося о своей части в общем и в подробностях.**

**За все виденное считаю долгом благодарить командира полка поручика Туймакаева, начальника пулеметной команды поручика Жукова и всех г.г. офицеров этой молодой части. Так же сердечно благодарю и молодцов солдат.**

**Родина наша, раздираемая когтями врагов, и призывающая истинных сынов своих к спасению ея, давно ждеть таких строевых частей, каким является только что осмотренный мной батальон славного Башкирского полка.**

**Я уверень, что часть эта послужит надежным кадром для нарождающихся новых Башкирских частей, а образцовая их служба опирающаяся на сознательную дисциплину, веру в правое дело Свободы и Родины и победу над врагом, послужит примером для других частей Народной Армии, формирующихся в Оренбурге.**

**Да здравствует нарождающаяся Народная армия!**

**Да здравствует первый Башкирский полк!**

**Приказ этот прочесть во всех ротах, сотнях, батареях и командах".**

Ошо уҡ осорҙа поручик Харис Туймаҡаев Башҡорт хәрби шураһы комиссияһы составында Башҡорт армияһы униформаһын эшләүҙә ҡатнаша. Милли униформа башҡорт ғәскәрҙәрендә 29 августа индерелә.

1918 йылдың 30 авгусында Х. Туймаҡаев Башҡорт хәрби шураһының Ирекле отрядтар бүлеге ҡарамағына күсерелә. "Вместо поручика Туймакаева командиром 1-го Башкирского полка назначается подполковник Якубовский. Первому предписывается сдать полк, а второму принять и о сдаче и приеме донести Башкирскому военному совету...", - тиелә фарманда.

Артабан уны Башҡорт хөкүмәтенең уполномоченныйы сифатында Үҫәргән кантонына ебәрергә булалар. Бында Харис Туймаҡаев Усман Ҡыуатов менән Үҫәргән кантоны идараһы эшен юлға һалыу менән шөғөлләнә. Башҡортостан автономияһының урындағы власть органдары яңы аяҡҡа баҫҡан осорҙа улар кадрҙарға ҡытлыҡ кисерә. 16 октябрҙә Башҡорт хөкүмәтенә яҙған хатында вәкилдәр кантон идараһын белгестәр менән тәьмин итеү мәсьәләһен хәл итеүҙе һорап мөрәжәғәт итә. "Для успешной работы просим все просьбы удовлетворять без задержки, в противном случае наше пребывание будет бесполезным", - тип хәбәр итә Туймаҡаев.

1918 йылдың ноябренән поручик Туймаҡаев Башҡорт ғәскәри идараһында махсус йомош буйынса обер-офицер булып хеҙмәт итә. Уға штабс-капитан званиеһы бирелә.

Артабан милли хәрәкәт документтарында уның исеме осрамай. 1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡан мәлдә аҡтар яғында ҡалғандыр, бәлки. Уның артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

✓ ***Хатта глобалләштереү шарттарында конкурентлыҡҡа һәләтле хеҙмәт ойошторорға була. Минең баһам буйынса, тәбиғи фактор төп урында тора алмай, иң мөһиме, технологиялар һәм хеҙмәтте ойоштороу.***

# РӘСӘЙ ХАЛҠЫ

## Троллейбус - ул дәүләткә генә ышанып ултырыу. Троллейбустан төшөү - ул

**(Башы 1-се биттә).**

### Әгәр сеймал бөтһә…

Ысынлап та, беҙ әлеге көндә ресурстар иҫәбенә йәшәйбеҙ һәм улар бөтһә, тотош ил хәрәкәтһеҙ ҡаласаҡ, йәғни троллейбус туҡтаясаҡ. Күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: бөгөн Рәсәйҙә нефть сығанаҡтары 10 млрд тонна тирәһе һәм илдә йылына 500 млн тонна нефть табыла. Был запас сама менән егерме йылға ғына етәсәк. Был ваҡыт тиҙ генә үтеп китәсәк һәм йылдан-йыл табылған нефть күләме кәмей барасаҡ.

Әлеге көндә табылған 500 млн тонна нефттең яртыһын беҙ һатабыҙ, яртыһын үҙебеҙ ҡулланабыҙ. Әгәр ҙә нефть запасы кәмеп, 500 млн тонна урынына 250 млн тонна ғына нефть сығара башлаһаҡ, беҙ уны йә һатмаҫҡа, йә үҙебеҙ ҡулланмаҫҡа тейешбеҙ. Тик нефтте һатмаһаҡ, сит илдән көнкүреш электроникаһы, кейем-һалым һәм хатта аҙыҡ-түлек һатып ала алмаясаҡбыҙ. Тимәк, электр энергияһы, яғыулыҡ булһын, тиһәк, беҙ туйғансы ашамаҫҡа тейеш булып сығабыҙ. Был проблеманан сығыуҙың тағы бер юлы бар: сит илдән һатып алыу өсөн ил эсендә тотонмаҫҡа, әммә бының өсөн беҙ утты һүндерергә, машиналарҙа йөрөмәҫкә тейешбеҙ. Йәғни, хатта нефть табыуҙың күләмен генә кәметеү ҙә ҙур катаклизмдарға килтерәсәк. Миненсә, бөтә Рәсәй бөгөн иҡтисади тетрәнеүҙәр алдында тора. Ә иҡтисади тетрәнеү, үҙ сиратында, йәмғиәттәге тетрәнеүҙәргә алып килә.

Минең фекеремсә, ил Президенты Д. Медведев сеймалға бәйле булыуыбыҙ проблемаһын аңлай, сөнки һуңғы осорҙа ул был хаҡта үҙенең телмәрҙәрендә бер нисә тапҡыр ҡабатланы. Ошо уҡ проблема турaһында Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов та эшләй башлауының тәүге көндәрендә үк үҙ фекерен белдерҙе. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, миненсә, ил һәм республика президенттарынан тыш, идара итеү органдарының урта звеноһы, интеллигенция һәм ябай халыҡ быға төшөнөп етмәй. Нисек кенә ҡыҙғаныс булмаһын, президенттарҙың ресурстар иҫәбенә йәшәүебеҙ һәм ул ҡасан да булһа бөтәсәге турaһындағы һүҙе йәмғиәттәге һәр кешенең аңына барып еткәс кенә модернизацияны тормошҡа ашырыу мөмкин буласаҡ. Ул саҡта эшҡыуарҙар, мәҫәлән, Төркиәнән тауар ташып һатыу урынына шул уҡ продукцияны республикала етештерә башлар, йәки юғары технологиялы продукцияны сит илдән индергәнсе, исмаһам, франчайзинг шарттарында Башҡортостан территорияһында үҙенең компанияһын булдырыр ине.

Киң мәғлүмәт саралары ярҙамында бөгөн был проблемаға халыҡтың иғтибарын йәлеп итергә кәрәк. Йәғни, халыҡ власть менән бер ҡатарҙан был проблеманы хәл итешергә тейеш.

### Оптималләштереү

Әйҙәгеҙ, миҫал өсөн дөйөм белем биреү мәктәптәре селтәрен оптималләштереү турaһындағы тезисты алайыҡ. Күптәр оптималләштереү турaһында һөйләгәндә экономиялауҙы ғына күҙ уңында тота. Йәғни тулы булмаған комплектлы мәктәптәргә билдәле нормативтар ҡуйып, уларҙы яптың да, эш тә бөттө. Сөнки балалар һаны аҙ булған мәктәптәрҙә бер балаға тотонолған сығым тулы комплектлы мәктәптәге бер балаға тотонолған сығымдан күберәк, тип фекер йөрөтә улар.

Ә, миненсә, "оптимизация" һүҙе экономиялау, сығымдарҙы кәметеү тигәнде түгел, ә "мәнфәғәттәр балансы" ("баланс интересов") тигәнде аңлата. Йәғни, оптималләштереү турaһында һүҙ алып барғанда ҡайһы бер осраҡта сығымдарҙың кәмеүен түгел, күбәйеү мөмкинлеген дә иҫәпкә алырға кәрәк. Иҡтисадсы ғына түгел, математик та булараҡ, шуны әйтер инем: математик терминдарҙа оптималләштереү тотонолған аҡсалар бирәмегенә, йәғни бер һумға ҡарата дөйөм йәмәғәтселек мәнфәғәттәренең (общественная польза) артыуын белдерә. Әгәр ҙә оптималләштереүҙе ошо рәүешле аңлатһаң, мәктәптәр селтәрен оптималләштереү бары тик сараларҙы экономиялауға ҡайтып ҡалмай. Тимәк, был яңылыҡтың берҙән-бер ыңғай яғы - бюджет сараларын экономиялау. Ҡайһы берәүҙәр, белем биреүҙең сифаты күтәрелә, тиер, сөнки ауыл мәктәптәренә ҡарағанда, әйтәйек, район үҙәктәрендә белемде яҡшыраҡ бирәләрҙер. Ярай, быныһы менән дә килешәйек. Тик яҡшылабыраҡ уйлап ҡараһаҡ, оптималләштереүҙең кире яҡтары ыңғай яғына ҡарағанда күберәк икән. Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитовтың дөрөҫ билдәләүенсә, ҡайһы бер ауылдарҙа мәктәп берҙән-бер цивилизация усағы, ә уҡытыусы белем сығанағы булған ихтирамлы кеше. Ошо усаҡ та юҡҡа сыҡһа, нимә була? Бөгөн былай ҙа ауылдарҙа эшһеҙлек, эскелек, суицид көслө. Икенсенән, эшһеҙ ҡалған уҡытыусыға нимә эшләргә? Ул йә һөнәрен алыштырырға һәм интеллектуаль эштән физик эшкә күсергә, йә үҙ һөнәре буйынса эшләр өсөн икенсе урынға күсеп китергә мәжбүр була.

***Бөгөн эшләп килгән "Мәктәп автобусы" тигән программа Америка тәжрибәһенән алынған. Был система Америкала уңышлы ғына эшләй ҙә ул, әммә уны беҙҙең шарттарҙа тормошҡа ашырыу мөмкинме? Бының өсөн Рәсәйҙә лә Америкалағы кеүек юлдар, төҙөк автобустар, ундағы кеүек ойоштороу эше булырға тейеш. Америка моделен Рәсәй шарттарында тормошҡа ашырыуҙың мөмкин түгеллеген власть структуралары ла яҡшы аңлай.***

Балаларҙы сит ауылға мәктәпкә йөрөтөү мәсьәләһенә күҙ һалайыҡ. Бөгөн эшләп килгән "Мәктәп автобусы" тигән программа Америка тәжрибәһенән алынған. Программаға ярашлы, автобус һәр көн иртән балаларҙы мәктәпкә алып китеп, кисен килтереп ҡуйырға тейеш. Был система Америкала уңышлы ғына эшләй ҙә ул, әммә уны беҙҙең шарттарҙа тормошҡа ашырыу мөмкинме? Бының өсөн Рәсәйҙә лә Америкалағы кеүек юлдар, төҙөк автобустар, ундағы кеүек ойоштороу эше булырға тейеш. Ҡышын юлға көрт һалғанда был автобус боҙолоп ултырһа, балаларҙың өшөп сирләүе ихтимал. Америка моделен Рәсәй шарттарында тормошҡа ашырыуҙың мөмкин түгеллеген власть структуралары ла яҡшы аңлай. Юлда балалар менән төрлө күңелһеҙ хәлдәр килеп тыумаһын өсөн уларҙы аҙнаһына бер тапҡыр автобус менән йөрөтөргә мөмкин, әммә был осраҡта интернаттар төҙөү, балаларҙы дәүләт аҡсаһына ҡарау кәрәклеге килеп тыуа. Бында беҙ сығымдарҙың артыуын күрәбеҙ. Баланың ата-әсәһенән ситтә тәрбиәләнеүе башҡорт халҡының быуаттар буйы формалашҡан ғаилә ҡоролошон юҡҡа сығарып, хатта ғаиләнең тарҡалыуына ла килтереүе бар. Ҡағыҙ-ҡәләм алып, шул рәүешле социаль һәм иҡтисади зыянды иҫәпләй башлаһаң, Федераль үҙәк тарафынан тәҡдим ителгән был моделдең бюджет сығымдары һөҙөмтәлелеген түбәнәйтеүгә килтереүен күрәбеҙ.

### Тормош - ул олимпия уйындары

Бөгөн халыҡ араһында, Көнбайыш Европа, АҠШ Рәсәйҙең тәбиғи ресурстарына хужа булырға тырыша, тигән хаталы ҡараш йәшәй. Әлбиттә, һәр илдә бындай хыял менән янған сәйәси һәм иҡтисади ағымдар бар, улар һәр быуатта ла булған. Миненсә, XX быуаттың аҙағынан - XXI быуат башынан алып халыҡ-ара бәйләнештәр идеологияһы бөтөнләй үҙгәрҙе. Хәҙерге көндә дәүләттәр үҙ-ара нимәләр өсөн көрәшә икән, был ресурстар, иң мөһиме, тәбиғи ресурстар өсөн түгел. Көрәш, тип атауы ла дөрөҫ булмаған был бәйге технологиялар үҫеше менән бәйле, йәғни ул ресурстарға түгел, белемгә йүнәлтелгән: бөгөн кем аҡыллыраҡ һәм башлыраҡ - шул бай. Быны иҡтисади тикшеренеүҙәр ҙә күрһәтә. Бөгөнгө көндә тәбиғи ресурстарға бай илдәрҙең иҡтисади һәм социаль хәле бигүк яҡшы түгел, ә ресурстары булмаған дәүләттәрҙең иҡтисади торошо, киреһенсә, бик юғары кимәлдә.

Бының иң сағыу миҫалы булып Япония тора. Икенсе Бөтә донъя һуғышы мәлендә Япония алда телгә алынған тәүге идеологияға эйәреп, Советтар Союзының көнсығышын, Ҡытайҙы, көньяҡ-көнсығыш Азияны хәрби көс менән баҫып алырға тырышты. Тик был һуғышта еңелеү кисергәндән һуң ғына Японияның һуғыштан һуңғы элитаһы илдең иҡтисадын икенсе төрлө, йәки ресурстарға түгел, ә белемгә ҡорорға кәрәк, тигән ҡарарға килә һәм бөгөнгө көндә Япония йәшәү кимәле юғары булған иң бөйөк технологик дәүләттәрҙең береһенә әйләнде. Ул Америка менән һәр саҡ ярышып йәшәне һәм АҠШ менән Япония араһындағы был бәйге әле лә дауам итә. Билдәле булыуынса, Япония территорияһында Американың хәрби базаһы урынлашҡан һәм әгәр ҙә улар тик хәрби эшмәкәрлек логикаһына таянып эш иткән булһа, күптән телгән бер дәүләтте ер менән тигеҙләр ине. Тик донъя үҙгәрҙе, һәм ул бөгөн олимпия уйындарын хәтерләтә. Унда дәүләттәр төрлө ҡағиҙәләр сиктәрендә үҙ-ара ярыша. Был ярыштағы ҡағиҙәләр ҙә спорт уйындарындағы кеүек: күршеңә аяҡ салырға ярамай, әммә унда һиңә параллель урынлашҡан юлдар тәҡдим ителә. Әгәр ҙә Рәсәй бөгөнгө көндә был юлдан насарыраҡ йүгерә икән, беҙ шунда уҡ бында йә күршеләребеҙҙе аяҡ салыуҙа ғәйепләй, йә насар сифатлы юл әҙерләүенә зарлана башлайбыҙ. Беҙҙең бар бәләбеҙ ошонда ла инде. Рәсәйгә һәм Башҡортостанға күптән үҙенең проблемаларын үҙ аллы хәл итергә, уңышһыҙлыҡтарҙа башҡа илдәрҙе ғәйепләүҙән туҡтарға һәм илдең иҡтисадын модернизациялауға тотонорға кәрәк.

### Ауыл хужалығы

Был өлкәлә хәл ителә торған проблемалар былай ҙа күп һәм улар тағы ла артасаҡ, сөнки Рәсәй бөгөн Бөтә донъя сауҙа ойошмаһына инеү алдында тора. Миненсә, егерме йыл буйына был ойошмаға инеү мәсьәләһен кисектерә килһәк тә, Рәсәй ҙә, Башҡортостан да иҡтисадты был аҙымға әҙерләй алманы. Йәғни, ауыл хужалығын үҙгәртеп ҡороу йәһәтенән яңылыҡтар булманы. Бөгөн ауыл хужалығы тауары етештереүселәр дәүләт ярҙамынан башҡа йәшәй алмай. Билдәле булыуынса, был ойошмаға инеү иҡтисадты дәүләт ярҙамынан тыш күтәреүҙе күҙаллай, йәғни, дәүләт уларға бөтөнләй ярҙам итеүҙән туҡтаясаҡ.

Бөгөн ауыл хужалығы тауарҙарын етештереү һөҙөмтәле түгел, тигәндә, яғыулыҡтың ҡиммәт булыуына, хеҙмәтте ойоштороу түбән булыуына, ауыл хужалығы технологияларының артта ҡалыуына һәм тәбиғәт шарттарына һылтаналар. Был шарттарҙың ҡайһыһы мөһимерәк икәнен асыҡлау маҡсатында белгестәргә һорау биргәнем булды. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, Бөтә донъя сауҙа ойошмаһына ингәндән һуң Рәсәй ауыл хужалығы конкурентлыҡҡа эйә була аласаҡмы икәненә аныҡ ҡына яуап ала алманым һәм был туралағы мәғлүмәттәрҙе фәнни мәҡәләләрҙә лә тапманым.

Әммә, гражданин булараҡ, үҙемдең күҙәтеүҙәремдән сығып, шуны әйтергә мөмкин: хатта глобалләштереү шарттарында конкурентлыҡҡа һәләтле хеҙмәт ойошторорға була. Минең баһам буйынса, тәбиғи фактор төп урында тора алмай, иң мөһиме, технологиялар һәм хеҙмәтте ойоштороу. Бының өсөн тәүҙә халыҡтың менталитетын үҙгәртеү кәрәк. Һуңғы тиҫтә йылдар эсендә колхоз-совхоздар ҙа юҡҡа сыҡты. Иғтибар итһәгеҙ, коллектив хужалыҡтар бөтә донъяла: АҠШ-та ла, Европала ла бар, тик уларҙың формаһы ғына төрлөсә. Башҡорт халҡы ла борон-борондан эште күмәкләп эшләгән. Шуға ла мин ауыл хужалығының киләсәген тик коллектив формала ғына күрәм. Тик ул совет заманындағы кеүек түгел, ә яңыса булырға тейеш. Мин Америка университеттарында белем алып, унда коллектив хужалыҡтарҙың тәжрибәһен өйрәнгән кешеләрҙе беләм. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, Рәсәйҙә, хатта беҙҙең республикала ла бындай тәжрибә Хөкүмәт тарафынан ҡулланылмай. Бәлки, яңы етәкселек был тәжрибәне ҡулланып, ауыл хужалығын модернизациялау юлдарын хәл итергә тырышыр, тип ышанам.

### Рәсәйҙә капитализм

Ҡайһы берәүҙәр әйтеүенсә, халыҡтың менталитеты Рәсәйҙә капитализм төҙөргә мөмкинлек бирмәйәсәк, Рәсәй халҡына ирекле социализм хас. Капитализм турaһында һөйләгәндә, иң тәүҙә шуны аңларға кәрәк. Европа илдәрендәге капитализм, әйтәйек, АҠШ-тағы капитализмдан ҡырҡа айырыла. Американлылар фекеренсә, Европала капитализм бөтөнләй юҡ. Европа илдәрендәге һәм тотош Евросоюздағы системаны американлылар социализм тип атай. Йәғни, капитализмдың да, социализмдың да төрлө формалары бар. Әйтәйек, хатта Советтар Союзы ваҡытында ла баҙар мөнәсәбәттәре, баҙар хаҡтары менән эшләүсе магазиндар булған. Бында бары тик дәүләт һәм баҙарҙы көйләү мәсьәләһенең үҙ-ара нисбәте генә айырылыуы ихтимал. Һәр халыҡ үҙенең асылына ярашлы вариантты һайлап алырға тейеш. Миненсә, дөйөм Рәсәй халҡы һәм айырым алғанда башҡорт халҡы өсөн Ҡытай моделе яраҡлы. Әгәр ҙә 80-се йылдар аҙағына кире ҡайта алһаҡ, мин тап ошо моделде, йәғни сәйәси ҡоролошто үҙгәртмәйенсә, иҡти-

# ТРОЛЛЕЙБУСТА БАРА...

## дәүләткә генә ышанып ултырыуҙан туҡтау. Троллейбустан төшәйек, йәмәғәт!

садты модернизациялауҙы яҡлап сығыр инем.

Минең аңлауымса, Ҡытай үҙенең моделенә иҡтисади йәһәттән тулыһынса либераллек биреп, сәйәси яҡтан идара итеү тотҡаһын һаҡлап ҡалды. Быны дәүләт хаҡтар менән идара итә, тип аңларға ярамай, был моделдә хаҡтар түгел, ә уйын, баҙар бәйләнештәре ҡағиҙәләре иң мөһиме. Артабан улар был ҡағиҙәләрҙе кешеләргә баҙар мөнәсәбәтендә күберәк ирек биреүсе ҡағиҙәләргә үҙгәртә бара. Минең иҫләүемсә, Дэн Сяопин (Ҡытай реформалары авторы) программаһын тормошҡа ашырыу сиктәрендә Ҡытай хөкүмәте ауыл хужалығы тауарҙарын етештереүсе крәҫтиәндәргә ирек бирҙе һәм был ҡыҫҡа ваҡыт эсендә аҙыҡ-түлек продукцияһы проблемаһын хәл итеү мөмкинлегенә тыуҙырҙы.

Был ҡағиҙәләргә бәйле тағы бер миҫал. Гонконг 1997 йылға тиклем Великобританияның колонияһы була һәм ул капиталистик ил булараҡ үҫешә. Ҡытайға кире ҡайтарып биреү мәле еткәс, Гонконг халҡы араһында коммунистик Ҡытайға ҡушылыуға бәйле ҡаршылыҡтар килеп тыуа. Был осраҡта ла Ҡытай хөкүмәте аҡыллы эш итә. Ул "Бер ил - ике система" тигән лозунг иғлан итә һәм иҡтисади эшмәкәрлек ҡағиҙәһен шулай итеп ойоштора: уның буйынса Гонконг Ҡытайҙың айырылғыһыҙ өлөшө булараҡ йәшәй, әммә унда капитализм ҡоролошо рөхсәт ителә. Ул осорҙа ошо моделде боҙмау өсөн Ҡытай халҡына, хатта етәкселәргә лә Гонконгҡа күсеү тыйылған була. Ҡағиҙәләрҙе шул рәүешле яйлап үҙгәртеп, улар Гонконг тәжрибәһенең Ҡытайҙың көньяҡ провинцияларына таралыуына өлгәшә һәм хәҙерге көндә Гонконг ҡына түгел, ә Ҡытайҙың бөтә көньяҡ өлөшө Европалағы кеүек матур, заманса ҡалалар менән сыбарланған. Был ерҙәрҙә брендтары бөтә донъяға билдәле Америка һәм Европа компаниялары продукцияһын етештереүсе фабрика һәм заводтар урынлашҡан. Беҙ бөгөн Гонконгтағы кеүек үк иҡтисадта капитализм закондары хөкөм һөргән Көньяҡ Ҡытай етештергән кеҫә телефондары, компьютерҙар менән файҙаланабыҙ.

Ҡыҙғаныска ҡаршы, 80-90-сы йылдарҙы кире ҡайтарып булмай. Ҡытайса иҡтисади моделде үҙебеҙҙә тулыһынса тормошҡа ашыра алмаясаҡбыҙ, әммә уның ҡайһы бер элементтарын әле лә ҡуллана алыр инек. Мәҫәлән, Ҡытайҙағы иҡтисади федерализм моделен дәүләт идаралығы көслө булған Рәсәйҙә лә ҡулланырға булыр ине. Был айырым тема һәм был һөйләшеү сиктәрендә генә уны асып булмаясаҡ.

### Заманға яраҡлаштырыу

Һуңғы осорҙа һәр өлкәлә лә модернизация тигән һүҙ йыш осрай. Модернизация һүҙенең нигеҙендә "заманса" тигән мәғәнә ята, йәғни, "заманға яраҡлаштырыу". Кешелек алға бара һәм бөгөн ул кисәгенән, ә иртәгә бөгөнгөнән айырылып торасаҡ. Шуға ла заман менән бергә атлау мөһим. Тимәк, модернизациялау - ул иҡтисады, йәмғиәтте, беҙҙе уратып алған бөтә нәмәне заманға яраҡлаштырыу.

Модернизация һүҙен сәнәғәткә яңы технологиялар индереү тип аңлаусылар бар. Мәҫәлән, беҙ республикала компьютер етештереүсе завод төҙөһәк, был, әлбиттә, иҡтисадта алға табан аҙым була һәм быны бер һүҙһеҙ модернизация тип атарға мөмкин. Әммә модернизацияның икенсе өлөшө лә бар: бөтә йәмғиәтте, йәмғиәттәге бәйләнештәрҙе заманға яраҡлаштырыуҙы күҙ уңында тота ул. Бында ла беҙ артта ҡалғанбыҙ. Дәүләт руле артында Советтар Союзының коммунистар партияһы тормай, әммә миңә беҙ һаман да Советтар Союзында йәшәйбеҙ төҫлө тойола. Бөтә сәйәси система һәм дәүләт ҡоролошо технологияһы исемен генә үҙгәртеп, үҙенең асылын тулыһынса һаҡлап ҡалды кеүек. Совет ваҡытында СССР-ҙың Юғары Советы булһа, хәҙер Дәүләт Думаһы. Ваҡытында идара итеүсе коммунистик партия урынына "Берҙәм Рәсәй" партияһы килде. РФ Президенты модернизация тураһында һүҙ ҡуҙғата икән, ул сәнәғәттәге технологияларҙы күҙ уңында тотмай, ул күберәк йәмғиәттәге үҙгәрештәр, гражданлыҡ йәмғиәте тураһында һөйләй. Әгәр ҙә беҙ йәмғиәтте модернизациялап, гражданлыҡ институттары индереп, әлеге сәйәси көстәр араһында ярыш ойошторһаҡ, төрлө ҡараштарға толерантлыраҡ һәм түҙемлерәк булһаҡ, ул саҡта яңы идеялар мотлаҡ тыуасаҡ һәм сәнәғәт үҙенән-үҙе, тәбиғи рәүештә модернизацияланасаҡ.

### Баҙар иҡтисадында башҡорттарҙың роле

III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының "Урта һәм бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү" секцияһы ултырышында башҡорттарҙың баҙар иҡтисадындағы роле тураһында ла фекер алышыу булды. Ҡоролтайға әҙерлек мәлендә үҡ семинарҙар, республика эшҡыуарҙарының съезы үткәрелде. Секция эшендә башҡорт халҡының эшҡыуарҙар йәмәғәтселеге, дәүләт органдары менән берлектә эшләйәсәк төрлө концепциялары тәҡдим ителде. Һөйләшеүҙәр барышында Башҡортостанда эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүсе башҡорттарҙың аҙыраҡ булыуы асыҡланды. Булғандары ла тауар етештермәй, ә һатып алыу-һатыу менән шөғөлләнә. Бынан шундай һығымтаға килергә була: беҙгә нимәнелер үҙгәртергә кәрәк. Әгәр ҙә беҙ һаман да иҡтисадта әүҙем булмаһаҡ, беҙҙең арала етештереүселәр ҙә, эшҡыуарҙар ҙа аҙыраҡ буласаҡ. Беҙ йышыраҡ дәүләт ярҙам итергә, нимәлер төҙөргә тейеш, тип уйларға күнеккәнбеҙ һәм башҡорттар күпләп йәшәгән районларҙа иҡтисад тейешенсә үҫешмәгән, тип гәйепләйбеҙ. Былар барыһы ла дөрөҫ, әлбиттә, әммә был үтенестәр үткән заманға тәғәйенләнгән.

Бөгөн конкурентлыҡҡа һәләтле булыу өсөн башҡорттарҙың менталитетын үҙгәртергә кәрәк. "Урта һәм бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү" секцияһында яңы башҡорт образы булдырыу тураһында һүҙ булды. Был образ мотлаҡ эшҡыуар башҡорт булырға тейеш. Хәҙер беҙгә телевидение, гәзиттәр аша эшҡыуарҙарҙы күберәк күрһәтергә, улар тураһында романдар, пьесалар яҙырға, йәғни уларға күберәк иғтибар бүлергә кәрәк. Ошо миҫалдарҙы күргәндән һуң халыҡ, бигерәк тә йәштәр, эшҡыуарлыҡҡа тартыласаҡ, һәм беҙ бер нисә йылдан уңышлы милләткә әүереләсәкбеҙ. Ҡыҙғаныска күрә, ваҡытлы матбуғат саралары аша рекламаланған бөгөнгө уңышлы башҡорт образы киләсәккә төбәлмәгән, ул беҙҙе үткәнгә ныҡыраҡ бәйләй. Әлбиттә, мин халҡымдың тарихы менән ғорурланам, халҡымдың ул һәм ҡыҙҙарының иҫ киткес талантлы булыуын да беләм. Тик беҙ милләтебеҙҙә булған бөтә яҡшы сифаттарҙы күрһәтәбеҙ, әммә яңы нәмә уйлап тапмайбыҙ. Ә тормош иҡтисади яҡтан да уңышлы булған шәхестәр күп булыуын талап итә. Улар бар, тик улар тураһында һөйләмәйҙәр. Башҡорттар яугир халыҡ, ә яугир ул бик әүҙем кеше, тиҙ генә ҡарар ҡабул итеү һәләтенә эйә, башҡалар менән идара итә һәм үҙ артынан эйәртә. Әгәр ҙә башҡорттар яҡшы яугир булған икән, Рәсәйҙең төрлө яуҙары осоронда үҙ аллы ойошоп, ғәскәр төҙөүе билдәле икән, заманса шарттарҙа был сифаттар эшҡыуарҙарға күсә ала. Японияла, мәҫәлән, ҡасандыр формалашҡан самурай образы XX быуат башынан үҙгәрә барып, Икенсе Бөтә донъя һуғышынан һуң бөтөнләй икенсе образға - әүҙем, уңышлы япон эшҡыуары образына әүерелә. Халҡыбыҙҙағы яугирлыҡ образын уңышлы эшҡыуар образына әйләндерһәк, ун йыл да үтмәйәсәк, йәштәр араһында эшҡыуарҙар күбәйәсәк. Башҡорт халҡы совет осоронда дәүләткә күберәк һалынып өйрәнде һәм дәүләткә генә ышанып ултырып, халҡыбыҙҙың бик матур йүнселлек сифаттарын юғалтырға өлгөргәнбеҙ. XIX быуатҡа тиклем беҙ бар нәмәне үҙ аллы хәл итә алғанбыҙ бит. Хатта башҡорт халҡының Рус дәүләтенә ҡушылыуын иҫкә алһаҡ та ул ҡарар һәр ырыуҙың үҙендә, үҙаллы хәл ителгән. Был инде водитель ҡайҙа алып бара, шунда китеп барған троллейбус түгел.

> ***Башҡорттар яугир халыҡ, ә яугир ул бик әүҙем кеше, тиҙ генә ҡарар ҡабул итеү һәләтенә эйә, башҡалар менән идара итә һәм үҙ артынан эйәртә. Әгәр ҙә башҡорттар яҡшы яугир булған икән, Рәсәйҙең төрлө яуҙары осоронда үҙ аллы ойошоп, ғәскәр төҙөүе билдәле икән, заманса шарттарҙа был сифаттар эшҡыуарҙарға күсә ала. Халҡыбыҙҙағы яугирлыҡ образын уңышлы эшҡыуар образына әйләндерһәк, ун йыл да үтмәйәсәк, йәштәр араһында эшҡыуарҙар күбәйәсәк.***

### Бал, бал ҡорто, ат һәм ҡымыҙ

Яңыраҡ Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов башҡорт атының, башҡорт ҡымыҙының, башҡорт бал ҡортоноң, башҡорт балының брендын булдырыуҙы тәҡдим итте. Был фекерҙәр, йәғни уларҙың башҡорт халҡына традицион эшҡыуарлыҡты үҫтереү мөмкинлеге бирәсәге тураһында III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы барышында беҙҙең секцияла яңғырағайны. Бал етештереү, мәҫәлән, традицион эшҡыуарлыҡҡа инә. Әммә уны бөгөн модернизацияларға, йәғни заманға яраҡлаштырырға мөмкин. Мәҫәлән, авиарейстар мәлендә таратылған джемдар урынына бал төрөп һатырға була. Эшҡыуар балын бындай ысул менән төрә икән, ул уны авиакомпанияларға бер нисә тапҡырға ҡыйбатыраҡҡа һата ала һәм һинең алдыңда тотош донъя баҙары асыла. Әлбиттә, даны бөтә донъяға таралған балды башҡалар һатмаһын өсөн беҙ был брендты законлы рәүештә нығытырға тейешбеҙ.

Туризм үҫеше өсөн дә республикала шарттар бар. Әммә бында шуны иҫәпкә алырға кәрәк: беҙҙең өсөн ҡыҙыҡлы булған урындарҙың башҡаларҙа ҡыҙыҡһыныу уятмауы ла бар. Мәҫәлән, мин Шүлгәнташ мәмерйәһе хеҙмәткәрҙәре менән һөйләшкәндә ҡыҙыҡлы факт ишеткәйнем. Бәҡтиһәң, сит илдән килгән туристарҙы мәмерйәгә ҡарағанда был территориялағы урман ныҡыраҡ ҡыҙыҡһындыра икән. Беҙ иҡтисадты үҫтереүҙә туризмға ғына өҫтөнлөк бирә алмайбыҙ. Шул уҡ ваҡытта Вена, Париж, Мәскәү, Санкт-Петербург менән дә ярыша алмайбыҙ. Шуға ла был йүнәлешкә иҡтисади үҫтереүсе берҙән-бер ысул итеп ҡарарға ярамай. Ул республика иҡтисадында икенсе, өсөнсө роль уйнай ала, шулай ҙа төп ролдә ниндәйҙер заманса сәнәғәт йәки етештереү ысулы торорға тейеш.

Туризмдың иһә һөҙөмтәле юлдарын эҙләгәндә генә уңышҡа өлгәшеп буласаҡ. Башҡорт атын ғына алайыҡ. Мин бер нисә йыл элек интернет аша АҠШ-та "Америка-башҡорт аты" йәмғиәте барлығын асыҡланым. Ҡасандыр Америкага индерелгән башҡорт аты тоҡомо фермерҙар тарафынан һаҡланып ҡалған. Ҡыҙыҡһыныусан американлылар был аттың Уралдың көньяҡ төбәгенән килтерелеүе һәм ул ерҙәрҙә әле лә башҡорт халҡы йәшәүен белә. Был тоҡомдың ҡайһы бер үҙенсәлектәре церебраль паралич сирле балаларҙы, хәрәкәт-таяныу аппараты ауырыуҙарын дауалауҙа ҡулланыла. Тап ошо үҙенсәлектәре өсөн Америка фермерҙары был тоҡомло аттарҙы үрсетә лә инде. Башҡорт аты Скандинавияла ла бар. Әгәр ҙә башҡорт тоҡомло аттарҙы Америкала, Европала кешеләрҙе дауалау өсөн ҡулланалар икән, беҙ республика территорияһында халыҡ-ара курорттар төҙөй алмайбыҙмы ни? Бындай курорттар урындағы халыҡты эш менән тәьмин итергә лә мөмкинлек бирер ине. Ошо уҡ курорттар янында ауыл халҡы үҙе етештергән тауарҙы ла һата алыр ине. Бөгөн бар көнбайыш илдәре халҡының экологик таҙа аҙыҡ-түлек тип иҫе китә лә инде. Америкала хатта тәбиғи продукция һатылған махсус баҙарҙар бар. Был саҡта ауыл хужалығы тауарын етештереүсе ауыл халҡының продукцияһы бик үтемле тауарға әйләнер ине.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Илдар Үзбәк улы һүҙен шулай осланы: "Троллейбус - ул дәүләткә ышанып ҡына ултырыу. Минең өсөн троллейбустан төшөү - ул дәүләткә ышанып ҡына ултырыуҙан туҡтау. Бер генә миҫал: Башҡортостан Республикаһы Президентының интернеттағы блогынан күренеүенсә, халыҡ һаман да көнкүреш мәсьәләләрен хәл итеүҙе Хөкүмәттән көтә, әммә берәү ҙә уларҙы үҙе хәл итеү юлын күрһәтмәй. Ә бит проблемаларҙың күп өлөшө урындарҙа, халыҡтың үҙе һәм урындағы власть органдары тарафынан хәл ителергә тейеш. Ошоно аңлау дәрәжәһенә күтәрелә алһаҡ... тормошобоҙ алға тәгәрәйәсәк".**

**Ләйсән НАФИҠОВА менән Әхмәр ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо.**




Колупаевтың альбомын яһап бөтөүгә, тағы әллә нисә "дембель" сиратҡа торғайны инде. Тәфтизән өсөн тағы йоҡоһоҙ төндәр башланды. Һалдат шинеле туҡымаһы менән бик матур итеп тышланған, төүге битендә китеп барған, ә аҙаҡҡыһында килә яткан йәшел вагондар таҡҡан тепловоз һүрәте төшөрөлгән күҙҙең яуын алып торған альбомдар, әлбиттә, тыуған яҡтарына ҡайтырға йыйынып йөрөгән һалдаттарҙың күңеленә хуш килә. Төндәрен өҫтәлмә эштәр йөкмәтһәләр ҙә, "бабайҙар" хәҙер унын менән бик һаҡ ҡына, хатта юхаланып ҡына һөйләшкән һымаҡтар. Уға ҡалһа, көндөҙ йоҡлап алырға мөмкинселек бирәләр. Колупаев хатта "каптерка"ның асҡысын да биреп ҡуйҙы уға. Шундағы өйөлөшеп яткан обмундирование өҫтөндә булһа ла йоҡо бик тәмле була икән ул һалдат кешегә. Занятиелар алдынан исемлек буйынса тикшергән саҡта йыш ҡына взвод командирына сержанттың "Рядовой Абдулов нарядта...", йә иһә "Рядовой Абдулов наряд һунындағы ялда...", тигән ысынбарлыҡҡа бигүк тап килмәгән докладын ишетергә тура килә. Йәш һалдаттарҙың, ғәҙәттә, нарядтан башы сыҡмағанын белгән лейтенант, күрәһең, быға ышанып та ҡуя...

Ике йыл эсендә командирҙар алдында ярайһы ғына абруй яулап өлгөргән сержант Колупаев батальон командирынан: "Кемде үҙ урыныңа әҙерләнең?",- тигән һорауына хатта бер ҙә икеләнеп тормаҫтан: "Рядовой Абдуловты!" - тип яуап бирҙе.

- Иртәрәк түгелме, иптәш сержант, унын ярты йыл хеҙмәте лә тулмаған бит. Етмәһә, сержанттар мәктәбендә лә уҡымаған...

- Ул бында килгәндә үк әҙер сержант ине, - тип көлдө Колупаев.

- Ҡарап ҡарарбыҙ, - тине командир...

Бер мәл дневальный булып торғанында казармаға Тәфтизән тәүҙә хеҙмәт итә башлаған полктың замполиты Сафронов килеп инде. Рядовой Абдулов устав ҡағиҙәһе буйынса "Дежурный по роте, на выход!" тип, тейеш командаларҙы бирә генә башлағайны, подполковник "Кәрәкмәй", тигәнде аңлатып ҡулы менән ишараланы.

- Мин шәхсән һиңә килдем, Абдулов, - тине ул йөҙөндә өлкән офицерҙарға хас булған ҡәтғилек билдәләрен сығармай ғына. - Бер генә һорауым бар, фәҡәт үҙем өсөн һәм үҙемдең ҡыҙыҡһыныуымды ғына баҫыу өсөн. Прокурорға түгел. - Ул мут йылмайҙы ла, тирә-йүндә башҡалар юҡмы икән, тигән һымаҡ, яҡ-яғына ҡаранып алғандан һуң: - Һине ошо полкка күсергән көндө һеҙҙә бер сержант казарманың икенсе ҡатының тәҙрәһенән "йыныш ҡына" йығылып төшә... Дөрөҫөн әйт әле, Абдулов, был - һинең эшең, шулай бит?...

Тәфтизәндең йөҙөнә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе. Ҡылған эше фашланыуынан үҙенә ниндәй генә ҡурҡыныс янамаһын, оло башын кесе итеп, һалдат менән шундай яғымлы һөйләшкән ағайға бер ҙә алдашҡыһы килмәне.

- Тап шулай, иптәш подполковник!

Абдуловтың алдашып, аҡланып маташырына һис шиге булмаған офицер бер аҙ ваҡытҡа албырғап ҡалды. Унан ни әйтергә лә белмәй:

- Рәхмәт, - тине һәм сығыу яғына йүнәлде. - Алдашмағаның өсөн рәхмәт, - тип өҫтәне сығыр алдынан.

Бер нисә көн уйланып йөрөнө Тәфтизән шулай ҙа. Кем белә, был подполковник ниндәйерәк кеше икәнен. Офицер һүҙен тота белгән ысын офицерҙар барҙыр әле, моғайын, тип үҙен-үҙе тынысландырырға тырышты. Бәхеткә күрә, һалдаттың борсолоуҙары бушҡа булды. Башҡаса уға бер кем дә был турала өндәшмәне. Әле ярты йыл хеҙмәт срогын да тултырмаған йәш һалдат өсөн әрме "бабайлыҡ"ы шуның менән тамамланды. Бер кемгә лә баш бирмәгән, хатта ниндәйҙер кимәлдә "ҡурҡыныс" булған "дикий башкир" тураһындағы "йүкә телефоны" аша бөтә полкка таралып өлгөргән хәбәр, әлбиттә, "бабайҙар"ға ла ишетелмәй ҡалманы. Хәҙер тик устав буйынса ғына ҡушҡандарын үтәп, тыйғандарынан тыйылып, рәхәтләнеп хеҙмәт ит тә ит. Күңел тыныс булғанда, бер кем дә һине кәмһетергә маташмаған шарттарҙа нишләп хеҙмәт итмәҫкә, ти...

Тик, үкенескә ҡаршы, унын яҡташы Васильев, һаман да сылғауҙар йыуа, итектәр таҙарта, ололарҙың ваҡ йомошталарына унда-бында йүгермәләй. Ә тегеләр унын һайын нығыраҡ йомшай. Тәфтизән бер нисә мәртәбә уны яҡлашып та ҡарағайны, тик арала бер һалдат:

- Нишләп унын өсөн борсолаһын, Абдулов. Күрмәйһеңме ни, уға хатта оҡшай был эш. Ана, ҡара , нисек итеп тырышып-тырышып башҡара ул һәр ҡушҡанды...

Ысынлап та, ул кемдендер яҡлашыуына мохтаж да түгел ине һымаҡ. Тәфтизәндең яҡлашыуы уға бер нисек тә тәьсир итмәне.

ҡалырға кәрәк икәне Тәфтизәндең ҡанына әсә һөтө менән һеңгәндер...

- Сәләм, Илһам, - тине сержант Абдулов үҙенең яҡташы менән күрешә-күрешә уны ҡосаҡлап алды. - Хәлдәр нисек?

Ай һайын тигәндәй күрешеп тора улар. Әммә, казармалары йәнәш булыуға ҡарамаҫтан, шунан да йышыраҡ күрешергә мөмкинселектәре юҡ уларҙың. Сөнки ракета частарындағы мотлаҡ булған аҙна-ун көндәргә һуҙылған "хәрби дежурство" уларҙың йыш күрешеүенә мөмкинлек бирмәй. Етмәһә, казарманан да теләһә ҡайһы ваҡытта сығып китеп булмай. Ә увольнение тигән нәмәне улар йыл ярым эсендә тик кинофильмдарҙа ғына күргәне бар. Иртәгә Тәфтизәнгә тағы ла ике аҙнаға ер аҫтына дежурға барырға кәрәк. Әле сираттағы инструктаждан һуң яҡташының казармаһына килде.

Хатта үҙенең йәштәштәре лә Васильевҡа һәр төрлө йомоштарын ҡуша башланы. Һис кенә лә үҙен ихтирам итмәгән, бер ҙә кеше ғорурлығы билдәһе булмаған яҡташына ҡул һелтәне. Ғәжәпкә ҡаршы, күптән түгел үҙенең "бабай"лығы менән айырылып торған Колупаев ҡына Васильевҡа бер ҙә ҡағылмаҫ булды.

Декабрь урталарында өр-яңы "дембель" итектәренә тағы бер ҡат үксә ҡуйҙырған, һалдат бүреген папахаға оҡшата биреберәк бейегәйтеп алған, шинелен самалап тыш ҡыҫҡартып кейгән сержант Колупаев иптәштәре менән хушлашты ла, Тәфтизән янына килде.

- Һау бул, дуҫ кеше, - тине ул һалдатҡа ҡул биреп. - Рәхмәт.

- Нимә өсөн?

- Бик ауыр саҡтарҙа ла кеше булып ҡала алғаның өсөн. Беләһеңме, Абдулов, мин "йәш" саҡта нисек мине ҡыйырһытҡандарын дошманыма ла теләмәҫ инем. Әллә буйым бәләкәй булғанға, әллә ҡурҡыуҙан, "бабайҙар"ға бер ҙә ҡаршы тора алманым. Хәйер, бер мин генә түгел, үҙең беләһең. Үҙемде ҡыйырһытҡан кешеләр өсөн йәштәрҙән үс алырға тигән уйым төптән ғәҙел булмаған икәненә ышандым. Ярай, Абдулов, насарлап иҫкә алма...

Тәфтизәнде Колупаев урынына отделение командиры итеп тәғәйенләнеләр. Полк командирының приказы менән уға "кесе сержант" тигән хәрби звание биргәс, кисен погондарына арҡыры ике һары таҫманан торған тейешле "лычка"ларын тегеп ҡуйҙы.

* * *

Тәфтизән кесе сержант дәрәжәһендә үҙенең ҡарамағына тапшырылған ун ике кешенән торған отделение менән уңышлы ғына хеҙмәт итә башланы. Унын отделениеһы һәр саҡ алдынғылар рәтендә булды. Ололарҙың йәшерәктәрҙе рәнйетеүенә бер ҙә юл ҡуйманы ул. Шулай итеп, тағы бер йыл үтеп китте. Дөйөм алғанда, унын әрмегә килгәненә йыл ярым да тулды. Хәҙер ул - ысын "бабай", йә иһә - "дембель"... Кемгә нисек оҡшай, шулай тип атаһындар әйҙә. Ниндәй генә дәрәжәлә булыуына ҡарамаҫтан, кеше булып

- О, Тәфтизән, сәләм! - тип шатланып ҡаршы алды яҡташы ла уны ҡосаҡлап. - Әйҙә, үт, - ул үҙенең карауаты янына әйҙәне. Тумбочка йәнәшәһендәге ултырғысты шылдыра биреп ултырырға ымланы.

- Бынау молодойҙарҙы әйтәм, аңра һарыҡ һымаҡ, бер ни ҙә аңламайҙар, ябай ғына бер эште лә ике-өс мәртәбә аңлатырға тура килә. Бер-икене арт һанына эләктермәйенсә тиҙ генә аңлар хәлдә түгелдәр, - тип һөйләнде ул эшлекле ҡиәфәт менән. Унан яҡташының яуырындарына кинәт күҙ һалып:

- О, яҡташ, ҡотлайым, өсөнсө "лычка"ң менән! - Ул Тәфтизәндең кисә генә сержант таҫмалары тегелгән яурындарынан тотоп һелкетте һәм тағы унын ҡулын ҡыҫты. - Ә бына миңә ҡалһа, минең принцип - "таҙа погондар - таҙа намыҫ", - тип көлдө үҙенең рядовой погонлы яуырындарына күрһәтеп.

- Был званиене мин офицерҙарға ярамһаҡланып, башҡаларҙы ошаҡлашып йөрөгән өсөн алманым, - тине Тәфтизән уйламайыраҡ һөйләгән яҡташына асыулы ҡарап. Һин быны бик яҡшы беләһең. Шаяртыуың - урынһыҙ, яҡташ.

- Йә, ярай инде, һалдаттар араһында шундай әйтем йөрөгәнгә генә әйттем, һис нәмәгә төрттөрөргә уйламағайным...

Танауҙарын мырш-мырш тартып, казарма иҙәнен тырыша-тырыша мастика менән ышҡып ялтыратып йөрөгән ике йәш һалдатҡа ҡарап, үҙенең йыл ярым элекке "йәш" сағын иҫләне. Моғайын, шул эш уларҙың өсөүһенә йөкмәтелгән. Өсөнсөһө - Илһамдыр. Инде "бабай" булараҡ, әлбиттә, Илһам иҙән йыуып йөрөйәсәк түгел. Ә шулай ҙа Тәфтизән яҡташына күптән түгел үҙҙәре лә шул йәштәр кеүек булғанды иҫенә төшөрҙө:

- Хәтерләйһеңме, Илһам, бында тәүге килгән көндө? Теге Колупаев, Задко, Сидоровтарҙы...

- Эйе, улар ошо көндө "гражданка"ла кыҙҙар ҡосаҡлап, араҡы һемереп йөрөйҙәр инде... - Илһам ни өсөндөр яҡташының ҡасандыр үҙен "бабай"ҙарҙан ҡурсалап алып йөрөгәнен иҫләгеһе килмәне.

- Әйткәндәй, теге бер ҡарыш сержант Колупаев әллә ни насар кеше лә булып сыҡманы. Хатта беҙ унын менән дуҫлашып та алдыҡ, - тине Тәфтизән.

Салбарының ике кесәһенә ҡулдарын тыҡҡан көйө теге һалдаттарға күр тауыш менән бер-икене русса һүгенеп, тағы ниндәйҙер өҫтәмә күрһәтмәләр биреп, казарма иҙәненән ҡабаттан йыуырға ҡушҡандан һуң, Илһам яңынан яҡташы янына карауатҡа килеп ултырҙы.

- Ә теге беҙҙең яҡташ Васильев ни хәлдә әле? - тип һораны. - Ул һинең менән бер полкта, буғай...

- "Бешмәҫтеке - төшмәҫ, төшмәҫтеке - бешмәҫ", тигәнде ишеткәнең бармы, - тине Тәфтизән. - Беҙҙең яҡта шундай бер әйтем бар. Үкенескә ҡаршы, "бабай" булһа ла, һаман шул көйө. Үҙенән йәшерәк призывтар ҙа унын шундай мәшәү икәнен аңлап алған. Кәрәкһә лә, кәрәкмәһә лә, уны төрлөсә мәрәкәләп аптыраталар. Ҡайһы берҙә тегеләрҙең ауыҙҙарын томалайым, әммә был оҙаҡҡа етмәй. Һаман да шулай, "...Васильев, шуны әпкил, Васильев, быны эшлә..." Хатта унын тураһында иҫләйһем дә килмәй. Шундай ҙа быуынһыҙ кеше булыр икән...

Васильев темаһына һөйләшкеһе килмәгән Тәфтизән һүҙҙе икенсерәк юҫыҡҡа бормаҡ булды:

-Һинең теге армияға оҙатып ҡалған ҡыҙың хат яҙҙымы шул, юҡмы?

- Мин киткәс, күп тә тормай кейәүгә сыҡҡан ул, - тине Илһам әллә ни иҫе китмәй генә. Тәүҙәрәк бер аҙ ҡайғырып йөрөһәм дә, һуңынан, киреһенсә, шатландым ғына...

- Нимәһенә шатланырға, ти? - тине яҡташы ғәжәпләнеп.

- Быны мин ни уйланым, - тине Илһам кителенең өҫкө иҙеүҙәрен ысҡындырып, карауатына йәтешләй биреп ултырҙы. - Кейәүгә сығып бик шәп иткән ул. Сөнки ни бары ике йыл буйына ғына ла һалдатты көтә алмаған ҡыҙҙа ниндәй ышаныс булһын, ти? Мин, мәҫәлән, унын һымаҡ ҡыҙ үҙемдең хәләл ефетем булыуын теләмәҫ инем...

- Унына ла дөрөҫ, - тип ризалашты Тәфтизән яҡташының фәлсәфәүи фекерен тыңлап бөткәс. - Ә бына минеке һаман да көтәм тип яҙған була. Нисегерәк барып сығыр инде...

- Йыл ярымын көткәс, арьяғына көтөр инде ул.

Илһам ни өсөндөр һүҙҙе ҡабаттан казарма яғына борҙо:

- Шулай ҙа, яҡташ, әйт әле, "бабай" булыуы күпкә еңелерәк бит...

- Минең өсөн бигүк еңел түгел, - тип көтөлмәгәнсә яуапланы Тәфтизән. - Йәш саҡта һәр кемгә лә ауыр, унынын үҙен дә бик яҡшы беләһең. Ә бына миңә, "бабай"ға, ни өсөн еңел түгеллеген аңларлыҡ хәлдә түгелһеңдер, тип уйлайым.

- Нимә, әллә офицерҙар ҡыйырһытамы үҙеңде?

- Эш офицерҙарҙа түгел... - тине Тәфтизән ауыр һулап. - Беләһеңме, Илһам, үҙемдең призыв егеттәре мине өнәп етмәгәнен һиҙәм. Тыштан ҡарағанда бер ни ҙә түгел һымаҡ та...

-Төшөндөрөңкөрәп һөйлә әле, - тине Илһам, ниҙер һиҙемләгәндәй.

- Үҙем йәшәгән казармала береһенә лә "бабай"лыҡҡа юл ҡуймайым бит мин, - тине Тәфтизән. - Әле, мәҫәлән, һинең казармала йәшәгән булһам, анау ике йәш һалдат менән һин үҙен дә бергәләшеп иҙән йыуып йөрөгән булыр инең. Йәғни, күпме генә тырышһалар ҙа, оло һалдаттар уставтан тыш мөғәмәлә менән һис тә булыша алмай. Етмәһә, күптән түгел мине взвод командиры ярҙамсыһы итеп тәғәйенләнеләр. Бәлки, ишеткәнһеңдер, хәҙер беҙҙең казармала төнгөләккә офицерҙар ҡалмай...

- Ишеткеләгәнем бар һинең был ғәҙәти булмаған ҡылығың хаҡында, - тине яҡташы бер аҙҙан. - Әйҙә, тартып килйек. - Ул йыуыныу бүлмәһенә күрһәтте.

✓ ***"Икеле" алып ҡайтҡан улығыҙҙың яңағына ебәрер алдынан йөҙ тапҡыр уйлағыҙ. Бала бер ниҙе лә онотмай. Теләһә ниндәй кәмһетелеүҙәрҙе лә ул ғүмер буйына хәтерендә һаҡлай.***



- Үҙем дә шул турала һиңә әйтергә уйлап йөрөй инем әле, - тип дауам итте Илһам тәмәкеһен ҡабыҙып, бер-икене һурып алғас ауыҙынан төтөнөн сығара-сығара. - Аҡ ҡарға булып, ғәҙәти ҡара ҡарғалар араһында йәшәүҙәре, ай-һай, ауыр булыр үҙеңә, яҡташ. Бына шуны әйтмәксе инем. Беҙҙең дембелдәр араһында һинең турала тап ана шул бигүк яҡшы булмаған хәбәр йөрөй. "Һинең яҡташың стариктарҙың абруйын төшөрә", тип, миңә лә әйткәндәре бар хатта...

* * *

Ҡайтҡанда Өфө вокзалына тиклем көсәүләп бер вагонда килделәр: Илһам, Васильев һәм Тәфтизән. Хәрби устав рөхсәт итмәүенә ҡарамаҫтан, формаларын үҙҙәренсә үҙгәртеп яһап алған егеттәр ҡапылда парадҡа әҙерләнгән сит ил ғәскәре һалдаттарына оҡшай бире-берәк ҡалғайны. Яурындары аша һалынған аҡ ебәк кер бауынан үргән аксельбанттары, түштәрендә шылтыраған миҙалға оҡшаған һәр төрлө значоктар, погон һәм петлицалары ситенә уҡалап тегелгән канттар, итек ҡунысына ике яҡтан бәйләп ҡуйылған аҡ ебәк суҡтар күҙҙең яуын ала. "Миҙалдар" араһында "Воин-спортсмен", "Специалист I класса", "Гвардия" тигән ысын һалдат значоктары ла күренә. Егеттәр - торғаны менән "герой"ҙар инде! Өҫкө иҙеүҙәре ҡаптырылмаған түштәрендә күренгән десант тельняшкалары ла уларҙын ҡиәфәтенә йәм өҫтәй. Вагон буйлап ундабында үткеләп, буштан-бушҡа ширҡаңлашып йөрөгән ҡыҫҡа күлдәкле йәш сибәр ҡыҙҙар был өс егеткә серле генә итеп күҙ һирпә...

Дембель яҡынлашып килеүенә ҡарамаҫтан, әле Васильевтың форма әҙерләүҙә эше лә юҡ ине. Тәфтизән уны йәлләп, үҙ ҡулдары менән яһап бирҙе уға был кейемде. Значоктарын да тапты. Хәҙер үҙ размерындағы матур форма кейеп алғас, Васильев бөтөнләйгә үҙгәреп киткән кеүек. Үҙенә яңы кейем килешеп кенә тора..

- Егеттәр, нишләп, исмаһам, берәй "ефрейтор" булып та алмағанһығыҙ? - тип шаяртты улар менән бер купела барған ҡырҡ йәштәрҙәге бер ағай тегеләрҙең погондарына күрһәтеп.

- Таҙа погондар - таҙа намыҫ, - тип шаяртты Илһам ғәҙәте буйынса.

Тәфтизән был һалдат әйтемен бигүк оҡшатып еткермәһә лә, һүҙгә ҡушылманы. Дембелгә ҡайтырға ике ай самаһы ҡалғас булған хәлде иҫләне...

... - Ну че, братан, маладых аберегаешь, да? Ишь, какой защитник нашелся... Ти панимаешь.. - тип тау халыҡтары акценты менән руссалап, бер төркөм үҙе кеүек үк "бабайҙар" курилкала уны ҡамап алып тәрбиәләргә тотондолар. Әле ошоғаса үҙ призывы егеттәре менән бер ваҡытта ла конфликтҡа килмәгән Абдулов мәсьәләне тыныс юл менән хәл итергә тырышты.

- Аңлағыҙ, егеттәр, мин ике йыл буйы армиялағы "бабайлыҡ" менән көрәштем. Йәш саҡта үҙемде үҙем яҡларға тырыштым. Хәҙер башҡа йәштәрҙе ҡыйырһытыуға ҡаршы торам. Хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ әле, егеттәр, үҙегеҙҙең йәш сағығыҙҙы...

Хәйер, был Ҡаф тауы егеттәрен йәш саҡтарында ла әллә ни рәнйетә алмағандарын белә Тәфтизән. Уларҙың көсө - берҙәмлектә... Үҙҙәренең йәш яҡташтарын бер ваҡытта ла ҡыйырһытырға бирмәй улар. Ә был юлы, йәштәрҙе яҡлашып, тау егеттәренең юлына арҡыры төштө...

... Кисә кис кенә казармала булды был хәл. Ошо егеттәр араһындағы ҡап-ҡара ҡаштары тоташып торған, ҙур танаулы, күмер кеүек ҡара күҙле урта буйлы "дедушка" бәҙрәфтә үҙенең яҙа төшөргән ярауын урыҫ милләтле йәш һалдаттан йыуҙырырға маташҡан мәлдә килеп инде ул. Алиевтың (уның фамилияһы шулай ине) бысрағын йыуырға теләмәгән һалдатҡа етеп барған йөнлө йоҙроҡто ваҡытында эләктереп алды Тәфтизән. Көслө ҡулдары менән тегенең беләген шаҡарып тотоп, йәтеш кенә итеп алып килеп, оло ярауының өҫтөнә ултыртты...

- Ти что сделаль, а? Знаешь, что ти уже труп, а?..

Тәфтизән бер ни ҙә өндәшмәне, тегене шул көйө бәҙрәфтә ҡалдырып сығып китте. Ике йыл буйы башҡалар кеүек үк бәҙрәф менән файҙаланып та, хатта дневальный булып торған саҡтарында ла был егеттәр бер ҡасан да иҙән йыумағанын бик яҡшы белә ул. Уларҙың урынына йә урыҫ, башҡорт, йә татар, йә иһә башҡа милләт һалдаттары йыуа.

...Яндарынан үткән бер нисә таныш һалдат яңғыҙ сержантты ҡамап алып ғауғалашҡан төркөмдө күрмәмешкә һалышты. Хәйер, кемдер күреп килеп, уны яҡлашыр тип өмөт тә итмәй ине Тәфтизән. Сөнки ике йыл эсендә кешеләрҙе бик яҡшы өйрәнеп алды ул. Бергә булғанда былар, әлбиттә, бик көслө. Күҙҙәренән осҡон сәсрәп торған асыулы йөҙҙәренә ҡарағанда, ысынлап та, үлтермәҫтәр тип уйлама. Ҡаршыһында торған Алиев уларҙың башлығы икәнен тиҙ аңлап алды. Быларҙы яңғыҙ көйө еңеү мөмкин түгеллеге көн кеүек асыҡ. Мөмкинселек булған хәлдә лә - йөҙгә бер сағыштырмаһында ғына... Шундай киҫкен осраҡтарҙа һәр саҡ тигәндәй ваҡытында башына килә торған дөрөҫ ҡарар был юлы һуңламаны. Бер генә юл - һөжүм! Һис кисекмәҫтән үҙе башлап һөжүм итмәһә, хәҙер үк тапап бөтөрәсәктәр. Аңғармаҫтан, бар көсө менән киҙәнеп, Тәфтизән алдында торған Алиевтың яңағына тондорҙо. Аңын юғалтҡан Алиев ергә ауҙы. Яҡташтарын ҡыйырһытҡан сержантты өҙгөләп ташларға йыйынған был егеттәрҙең юлын, әмәлгә ҡалғандай, әле генә килеп туҡтаған машинанан һикерешеп төшкән йәш лейтенанттар төркөмө бүлде. Таулылар тәүҙә был лейтенанттарға ла ҡаршы тороп маташырға йыйынды. Ләкин бик тәүәккәл күренгән йәш офицерҙарҙың нимәһенәндер бер аҙ ҡурҡтылар, буғай, билдәренән ысҡындырып әҙерләгән ҡайыштарын яңынан быуа башланылар... Кемдер курилкала башланырға торған ығы-зығыны күреп ҡалып, тейешле урынға хәбәр итеп өлгөргән, ахрыһы, шуға ла ашығыс рәүештә йәш офицерҙарҙы ебәргәндәр, Аллаһ рәхмәте төшкөрө... Милләт-ара конфликт килеп сыҡмаһын өсөн шуның кеүек шау-шыуҙы баҫырға әрме коллективында һәр саҡ тик офицерҙарҙы ғына ҡулланалар...

Алиев һынған яңағын дауалап, айға яҡын госпиталдә ятты. Шул арала сержант Абдуловты ҡабаттан "рядовой"ға төшөрҙөләр. "Хулиганлыҡ өсөн"... Бының өсөн, әлбиттә, Тәфтизән тик шатланды ғына. Сөнки был юлы уны, ысынлап та, дисбатҡа оҙатырға хәрби прокурорҙың тулыһынса хаҡы бар ине. Үҙ часындағы ЧП-ны ситкә сығармаҫ өсөн полк командиры прокурорҙы берәй нисек миһырбанлыҡҡа күндергәндер, моғайын, рәхмәт яуғыры...

- Эйе, ағай, погондар ҙа таҙа, намыҫ та... - тип яҡташының һүҙен ҡеүәтләгән булды Тәфтизән. Ғәҙәтенсә, беләгендәге "ЗИМ" сәғәтенә ҡарап алды...

Үҙенең уйында ни өсөндөр һаман да йыуантаҡ дембель Масловтың "...ҡара ҡарғалар араһында яңғыҙың аҡ ҡарға булып йөрөмә...", ә замполит Сафроновтың "... Аҡ ҡарғаны ҡара ҡарғалар яратмай", тигән һүҙҙәре буталды. Әле янында ултырған яҡташы Илһам да шул "аҡ ҡарға" тураһында ниҙер әйткәйне. Бәлки, ысынлап та, шулайҙыр... Тик аҡ ҡарғаны Тәфтизәндең бер ҡасан да күргәне юҡ, әммә аҡ сыйырсыҡты ғына күргәне бар. Үҙ күҙҙәре менән...

**(Аҙағы).**

ҒИБРӘТ ӨСӨН...

# ВӘХШИҘӘР ҒАИЛӘЛӘ ТӘРБИӘЛӘНӘ,

## йәғни яуызлыҡты тамырында ҡороторғамы?

**Суфыйҙар тураһындағы бер әсбапта яҙылған был ғибрәтле хәл. Борон-борон заманда бер аҡыл эйәһе йәшәгән. Үҙенең шәкерте менән донъя гиҙергә яратҡан был. Бер ауыл аша үтеп барғанда урам уртаһында бесәй балаһы менән уйнап ултырған баланы күреп ҡала былар. Аҡыл эйәһе малай янында туҡтап, байтаҡ ҡына ваҡыт уның уйнағанын күҙәтеп тора ла, ҡапыл ғына уға таяғы менән деңгәҙәтә һуғып ебәрә. Малай шунда уҡ йән бирә. Шәкерте йәне әрнеп ҡарттан был ҡылығына аңлатма биреүен һорай. Ҡарт шулай ти: "Аллаһы Тәғәләнән мин был малайҙың үҫкәс ҙур залимға әйләнәсәге һәм бик күп кешеләрҙең ғүмерен ҡорбан итәсәге тураһында хәбәр алдым. Уны үлтереп, мин миллиондарса ғәйепһеҙ ғүмерҙәрҙе ҡотҡарҙым" ,- ти.**
**Был риүәйәт һәр кемде уйландырырлыҡ. Сабый йәнен ҡыйыуҙан да хәтәрерәк ғәмәл юҡ, тип тетрәнәсәк күптәр. Икенсе яҡтан ҡараһаң... Әлеге аҡыл эйәһенең бәләкәй Наполеон, Гитлер, Бен Ладен, Чикатило һәм башҡа вәхшиҙәргә юлыҡмауы үкендереп тә ҡуя.**

### Наполеон

Психологтар фекеренсә, баланың ниндәй булып үҫәсәген кескәй сағынан уҡ белеп була. Залимлыҡ та бала саҡтан башлана.

Бына, мәҫәлән, Наполеон Бонапарт имсәк имгән саҡтан үҙ һүҙле, илаҡ булған. Уның илаҡлығы шул тиклем өйҙәгеләрҙең маҙаһына тейгән, уны хатта йыш ҡына яңғыҙын бер бүлмәгә бикләп ҡуйыр булғандар. Үҙ һүҙлелеге, ҡыҙыу ҡанлылығы, кирелеге үҫә төшкән һайын арта ғына барған. Биш йәшендә ул үҙенән өлкәнерәктәргә ҡаршы тора, ҡаршы һуғыша башлаған. Бер саҡ хатта уҡытыусыһының бармағын тешләп өҙә яҙған. Ниҙер оҡшамаһа, тамағы ҡарлыҡҡансы ҡысҡырып, ярһып, хәлдән тайыр булған. Яза бирһәләр иһә, иламаған, ауыртыуға ла түҙгән. Кемдәндер ғәфү үтенеү тигәнде бөтөнләй белмәгән ул.

Ун йәшендә Наполеонды Францияға хәрби училищеға уҡырға ебәрәләр. Бында уны тағы ла ҙурыраҡ һынауҙар көтә. Йәштәштәре уның йәмһеҙлегенән, ҡыҫҡа буйынан, ҙур башынан, ярлы булыуынан, акцентынан, хатта исеменән көлөр булған. Биш йыл уҡыу дәүерендә ул иптәштәре хәтерендә һуғыш суҡмары булараҡ ҡына тороп ҡала, яҡын дуҫтары ла булмай. Уҡытыусылары иһә уны "Аңра хайуан" тип йөрөтә. Уға бирелгән характеристикала шундай юлдар бар: "Иҫ киткес тәкәббер, дан яратыусы, тупаҫ, энергиялы, көйһөҙ, уйламайынса теләһә ниндәй аҙымға бара ала, уңайы тура килһә, ҙур дан ҡаҙанырға ла мөмкин..."

Шарттар, ысынлап та, уңайлы булып сыҡҡан...

### Сталин

Сталиндың атаһы йәшләй донъя ҡуйған. Иҫән сағында атаһы берҙән-бер улын аяуһыҙ туҡмай торған булған. 7 йәш булғанда атаһынан туҡмалып, Иосиф ҡулын һындыра. Ауыртыныуҙарына түҙә алмай, үкһеп-үкһеп илаған баланы йыуатыусы ла булмай хатта. Ҡулындағы яраһы шешеп, саҡ-саҡ үлмәй ҡала малай. Ошо хәлдән һуң ҡулы бер нисә сантиметрға ҡыҫҡарып ҡала уның. Улы сирләп ятҡанда ла туҡмауҙан туҡтамай атаһы. Улының күҙ алдында әсәһен дә туҡмап ырғыта. Психологтар тап бына ошондай вәхшилек Сталинға рәхимһеҙлек һабаҡтары биргән, тип иҫәпләй.

Дуҫтары Иосифты ла төрлөсә мыҫҡыллай, уның зәғифлегенән көлә. Туҡмалыуҙар, мыҫҡылланыуҙар мәңгелеккә күңеленә уйылып ҡала Иосифтың. Миллионлаған кешене үлемгә хөкөм иткәндә ул атаһынан үс алғандай рәхәтлек тойғолары кисерә.

Бала саҡтағы ауыртыу ғүмер буйы кешенең хәтеренән сыҡмай шул. Кес кенә Иосифтың күҙ йәштәре, ауыртыныуҙары өсөн миллиондарса ғәйепһеҙ кешеләрҙең йәне ҡыйыла.

### Фюрер

XX быуаттың иң ҡанэҫкес йәлләде Адольф Гитлер ҙа бала сағында бик бәхетһеҙ булған. Яуыз атаһы, тышҡы ҡиәфәтенең йәмһеҙлеге, йәштәштәре тарафынан кәмһетелеүҙәре, нескә күңеле уны шундай шәфҡәтһеҙ йыртҡыс итеп үҫтерә. Адольф динде күрә алмай. Әсәһе сиркәүгә алып барһа, әлеге сиркәүҙең ҡала менән бергә шартлап, күккә осоуын теләй. Бөтөн залимдар кеүек, Гитлер ҙа бик шыҡһыҙ ҡиәфәтле була. Психологтар раҫлауынса, үҙендең ҡиәфәтендән ҡәнәғәт булмау тойғоһо - кешелекһеҙлеккә илтеүсе тура юл ул.

**Заман Гитлеры.** Краснодар Гитлеры Александр Мовин эше бөтә Рәсәйҙе тетрәндерҙе. Йәш йыртҡыс, баҡсаһында крематорий яһап, үҙенең дуҫтарын, һөйәркәләрен, күршеләрен терелей яндырған. Мовин менән һөйләшкән психологтар шундай һығымта яһаған: таныштарын үлтереп, Александр инстинктив рәүештә кешеләрҙән үҙенең бәхетһеҙ бала сағы - алкоголик атаһы, хәйерселек, тиңдәштәренең мәсхәрәләүе өсөн үс алған. Әгәр кешене бала сағында яратмаһалар, наҙламаһалар, ҡыйырһытһалар, бер ҡасан да йәлләмәһәләр, ул яуыз, рәхимһеҙ булып үҫә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ысынлап та, залимдарҙы тәрбиә тыуҙыра. Балаларыбыҙ кеше үлтереүсе,ҡараҡ йәки залим булып үҫмәһен өсөн уларҙы яратырға кәрәк. Бер-береһенә хөрмәт менән ҡараған ата-әсәй янында бер ваҡытта ла залимдар, вәхшиҙәр үҫмәйәсәк.**

**Шуның өсөн, "икеле" алып ҡайтҡан улығыҙҙың яңағына ебәрер алдынан йөҙ тапҡыр уйлағыҙ. Бала бер ниҙе лә онотмай. Теләһә ниндәй кәмһетелеүҙәрҙе лә ул ғүмер буйына хәтерендә һаҡлай. Барлыҡ әҙәм аҡтығы, енәйәтселәрҙе бала саҡтарында кәмһеткәндәр. Залимдар золом шарттарында тәрбиәләнә. Герострат менән Нерондан башлап, Саддам Хөсәйен менән Осама Бен Ладен миҫалы ла шуны дәлилләй.**

**Суфыйҙарҙың тағы бер хикәйәтен иҫкә төшөрәйек. Бер аҡыл эйәһе эргәһенә бер ҡарт килә һәм уға: "Мин ғүмерем буйы ғибәҙәт ҡылдым һәм кешеләргә изгелек эшләнем. Ожмахҡа эләгерменме икән?" - тип һорау бирә. "Юҡ, эләкмәйәсәкһең", - ти аҡыл эйәһе. "Ни өсөн? - ти икән ҡарт. - Мин тормошомдо Аллаһҡа бағышланым. Ғибәҙәт ҡылыу тураһында ғына уйлап, хатта улымды ашатырға онота инем". "Нәҡ бына шуның өсөн дә, йәғни улыңды тәрбиәләргә онотоуың өсөн дә һин тамуҡҡа эләгәсәкһең", - ти аҡыл эйәһе. Фәһеме аңлашыла торғандыр.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КИТАП УҠЫУ... стрестан ҡотҡара

■ Гарвард медицина мәктәбе хеҙмәткәрҙәре түлһеҙлек менән яфаланыусыларҙың ниндәй аҙыҡ төрөнә өҫтөнлөк биреүен тикшереп ҡараған. Бәхтиһәң, уларҙың күбеһе иртәнсәк ҡыҙҙырылған бекон, майлы икмәк, ҡаймаҡ, сосиска һәм башҡа майлы аҙыҡ ашарға ярата икән. Асыҡланыуынса, был аҙыҡтар буласаҡ атайҙар өсөн бик зарарлы. Шуға ла белгестәр иртәнге ашҡа үсемлек һәм балыҡ майҙары ҡулланырға кәңәш итә.

■ Кеше организмында ҡартайыу һөҙөмтәһендә барған үҙгәрештәргә ҡаршы дарыу уйлап табылған. Уның авторы, Мәскәү дәүләт университетының биоинженерия һәм биоинформатика факультеты деканы Владимир Скулачев әйтеүенсә, был дарыу уның коллегалары тарафынан күптән түгел асылған SkQ1 антиоксиданты нигеҙендә эшләнгән. Был матдә күҙәнәктәрҙең энергетик үҙәгенә йыйылып, кислород ҡушылмаларының әүҙем формаларын нейтралләштерә. Күп һанлы тәжрибәләр күрһәтеүенсә, был дарыу ҡартайыу билдәләре булған йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын, остеопороз һәм ревматоидлы артрит, яман шештең ҡайһы бер формаларына дауа буласаҡ.

■ Бөгөн күптәр дарыуҙар урынына халыҡ дауаһы ҡулланырға тырыша. Вируслы миҙгел ауырыуҙары әүҙемләшкән мәлдә миндаль сәтләүеге ҡулланыу яҡшы һөҙөмтә бирә. Быға тиклем миндаль йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен профилактикалау, холестерин кимәлен түбәнәйтеү өсөн ҡулланыла ине. Бының өсөн кардиологтар көнөнә яҡынса 90 грамм миндаль ашарға кәңәш итә. Күптән түгел Норича (Великобритания) һәм Мессин ҡалаһы университеты (Италия) ғалимдары был сәтләүектең иммун реакцияларын көсәйтеү һәм вирустарҙың әүҙемлеген кәметеү һәләтен билдәләгән. Сәтләүектең тиресәһендә булған матдәләр лейкоциттарҙың әүҙемлеген арттырып, вирустарҙың күҙәнәк эсенә үтеп инеүен тотҡарлай. Миндалдең организмға ыңғай тәьҫире ул тулыһынса эшкәртелеп бөткәс тә һаҡлана әле.

■ Тирә-яҡ мөхит кеше тиреһенә кире йоғонто яһай һәм тиренең ҡартайыуына һәм башҡа проблемаларға килтерә. Өйгә ингәс тә тире яны һынауҙарға дусар була. Йорт һауаһының бер кубометрында яҡынса ярты миллион саң була. Бер грамм саңда меңләгән микроорганизм йәшәй. Ошо масса кешенең тиреһенә эләгә, күҙәнәктәрҙе ҡаплай һәм аллергия реакцияһын булдыра. Бер нисә ай эсендә тәҙрә ҡорғандарында ғына ярты килограмм саң йыйыла. Ә плинтус һәм шундай башҡа урындарҙа фатирҙағы бөтә саңдың 60 процентҡа яҡыны туплана.

■ Британияның Сассекс университеты ғалимдары иҫбатлауынса, китап уҡыу стресс хәленән сығыуҙың иң яҡшы ысулы. Китап уҡыу стресс кимәлен 68 процентҡа түбәнәйтә, пульсты һәм мускул тонусын нормаға килтерә. Китап уҡыу тынысландырыусы музыкаға, йәйәү йөрөүгә һәм бөтнөк сәйенә ҡарағанда ла тиҙерәк тәьҫир итә. Тикшеренеү авторы, когнитив нейрофизиолог Дэвид Льюис фекеренсә, стресты еңеү өсөн ниндәй китап уҡыу мөһим түгел. Бары тик уны йотолоп, ваҡиғалар эсендә йөҙөп йөрөп уҡырға кәрәк.

■ Австралия психологы Герхард Шорт белдереүенсә, эшкә кәйефһеҙ килгән хеҙмәткәр 20 минут эсендә ҡалғандарҙың да кәйефен төшөрә. Бәхтиһәң, бындай кешенән килгән биотулҡындар башҡаларға тәьҫир итергә һәләтле икән. Белгестәр әйтеүенсә, кемдең кәйефе йыш үҙгәреп тора, улар йөрәк-ҡан тамырҙары һәм ашҡаҙан сирҙәре менән дә йышыраҡ яфалана.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ҠОРБАН ҒӘЙЕТЕ МӨБӘРӘК БУЛҺЫН!

**Ҡорбан ғәйете - Аллаһы Тәғәләнең хаҡ хәбибе Ибраһимдың Раббыһына тоғролоғон, шул тоғролоҡ хаҡына хатта һөйөклөләрҙәнһөйөклө улын да ҡорбан итергә әҙер булыуын иҫкә алыу, мөьмин-мосолмандың иманға тоғролоғон һынау, хажға барыу мөмкинлеге булғандарға Исламдың изге урындары менән танышып, иманын нығытып ҡайтыу көндәре. "Был Ғәйзел-Кәбир - оло байрам көнөндә Әҙәм балаһы өсөн хайуан ҡанын ағыҙыуҙан да һөйкөмлөрәк эш юҡ", - тип өйрәткән Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм).**

Ҡорбан Исламда мөлкәт менән ҡылынған ғибәҙәттәрҙең береһе. Был Аллаһы Тәғәләгә биргән ниғмәттәре өсөн рәхмәт белдереү. Ҡорбан һүҙе "яҡынайыу", "яҡыныраҡ булыу" тигәнде аңлата. Дини термин булараҡ, был йөрәк менән Бөйөк Аллаһы Тәғәләгә яҡынайыу өсөн ғибәҙәт ҡылыу ниәтендә тәғәйен бер ваҡытта ҡорбан салыу. Әйтеп китеүебеҙсә, Ҡорбан Аллаһтың бирҙән-бер булыуын тәүгеләрҙән аңлатыусы, Раббыбыҙҙың яҡын ҡоло Ибраһим (ғәләйһисәләм) иҫтәлегенә лә арнала. Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән: "Ҡорбан - ул атабыҙ Ибраһимдың (ғәләйһисәләм) сөннәте".

Был бөйөк ваҡиғаның оло мәғәнәһе, фәһемле асылы Ҡөрьәндә лә әйтеп бирелә: "Салған ҡорбандарығыҙҙың ите лә, аҡҡан ҡандарының тамсыһы ла Беҙгә түгел, ҡорбан салғанда Уға ҡорбан салғандың тәҡүәлеге генә барып өлгәшә" ("Әл-Хаж", 37). Тағы ла Аллаһы Тәғәлә бойора: "Раббыңа намаҙ уҡы, Ҡорбан сал!" (Әлкәүсәр, 2). Дөйөм ҡабул ителгән фекер буйынса, был аяттағы намаҙ тураһында һүҙ "байрам намаҙын", ә "ҡорбан сал" байрам көндәрендәге "Ҡорбан"ды аңлата.

Ҡөрьәндең тағы бер бойороғо былай яңғырай: "Һеҙгә беҙ Аллаһ өсөн бирелгәндәрҙең һимеҙен тәғәйенләнек. Уларҙа һеҙҙең өсөн яҡшылыҡ бар. Сафҡа теҙеп, улар өҫтөндә Аллаһ исемен иҫкә алығыҙ. Ҡабырғалары йыйылғас, иттәрен ашағыҙ. Оялып, тартынып ҡына һораған кешеләргә лә ашатығыҙ. Шулай итеп, Беҙ уларҙы һеҙгә бойһондорҙоҡ. Бәлки, шөкөр итерһегеҙ!" ("Әл-Хаж", 36).

Әнәс (радыйаллаху анху) бер хәҙистә былай тип еткергән: "Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡараға ҡарағанда аҡ төҫтәре күберәк булған ике тәкәне ҡорбанға килтерҙе. Мин уның, хайуандарҙың аяғын ҡыҫып, "Бисмилләһ" менән тәкбир әйткәнен һәм үҙ ҡулдары менән уларҙы салғанын күрҙем" (Бухари, Муслим, Ибн Маджа, Тирмизи, Абу Дауд, Дарими).

Билдәле булыуынса, ит ризыҡтары менән кешелек ихтыяждарын ҡәнәғәтләндерер өсөн көн һайын меңәрләгән хайуан һуйыла. Ләкин уларҙы тик мөмкинлектәре булған кешеләр генә ҡуллана ала, ә ҡорбанға килтерелгән хайуандың ите, иң беренсе, фәҡирҙәргә, матди хәле ауыр ғаиләләргә таратыр өсөн тәғәйенләнгән. Шуға күрә лә Исламда Ҡорбан килтереү ысынында ла кешелеклелек һәм йомартлыҡты белдерә.

## Ҡорбан үтәлеү шарттары

**а) Ҡорбан тәғәйен бер ваҡытта салына.**

Ҡорбан килтереү ваҡыты - Ҡорбан байрамы көндәренең беренсе, икенсе һәм өсөнсө көндәре. Ошо ваҡыт үтеп киткәндән һуң ҡорбан салыу дөрөҫ тип һаналмай. Ҡорбан килтереү өсөн иң яҡшы көн тип беренсе көн һанала (10 Зөлхизә) - был Исмәғил ҡорбаны ваҡыты. Байрам намаҙы уҡылған ҡала һәм ауылдарҙа ҡорбанды байрам намаҙынан һуң, ә байрам намаҙы уҡылмаған урындарҙа - таң атҡандан һуң салалар. Был ҡорбан килтереү ваҡыты башланыу. Ул байрамдың өсөнсө көнөндә ҡояш байығанға тиклем тамамлана.

**б) Ҡорбанға килтереләсәк хайуан һау булырға тейеш.**

Ҡорбан өсөн тәғәйенләнгән хайуандың һаулығына һәм физик кәмселектәренә иғтибар итергә кәрәк. Ҡорбанға килтереләсәк хайуандың физик кәмселектәре ике төркөмгә бүленә: рөхсәт ителгән һәм рөхсәт ителмәгән.

**Рөхсәт ителгән етешһеҙлектәр:**

- Күҙе насар күреү, ҡылый күҙле булыу;
- Ҡалған аяҡтары менән ҡуҙғала алған хәлдә бер аяғы аҡһауы;
- Тыумыштан мөгөҙһөҙ булыуы;
- Тишкеләнгән, тамғалы ҡолаҡ остары;
- Бер нисә тештәренең булмауы;
- Ҡолағының йәки ҡойроғоноң ҙур булмаған өлөштәренең ҡырҡылыуы;
- Ҡолаҡтарының тыумыштан ҡыҫҡа булыуы;
- Ҡорсаңғы;
- Бестерелгән хайуан.

Бындай сифаттары булған хайуанды ҡорбанға килтереү шелтәләнә, әммә рөхсәт ителә. Ләкин иң яҡшы юл - ҡорбанға бындай етешһеҙлектәре булмаған хайуанды һайлау.

**Рөхсәт ителмәгән етешһеҙлектәр:**

- Бер күҙенең йәки ике күҙенең дә һуҡыр булыуы;
- Хайуандың һуйҙырыла торған ергә үҙе атлап бара алмаслыҡ аҡһаҡлығы;
- Бер йәки ике ҡолағының төбөнән ҡырҡылыуы;
- Күпләп тештәренең булмауы;
- Мөгөҙҙәре һынған булыуы йәки бер мөгөҙөнөң төбөнән булмауы;
- Ҡойроғоноң төбөнән булмауы;
- Елендә имсәктәренең булмауы;
- Хайуандың артыҡ ябыҡ йәки хәлһеҙ булыуы;
- Бысраҡлыҡ менән тукланған хайуан.

Шәриғәт күҙлеге буйынса, бындай характеристикалы хайуанды ҡорбанға килтереп булмай.

## Кемдәр Ҡорбанды мотлаҡ салдырырға тейеш?

Ҡорбан мотлаҡ булһын өсөн, түбәндәге шарттар үтәлергә тейеш. Кеше: мосолман булырға, эшкә яраҡлы булырға, бәлиғ булырға, иректе булырға, муким булырға, йәғни сәйәхәттә булмаҫҡа, фитр сәҙаҡаһын түләрлек хәлле булырға тейеш.

## Байрам көндәрендә нимә эшләргә?

Байрамды ысын мәғәнәһендә байрам итеп үткәреү өсөн, тип өйрәтә Ислам, был көндә мосолмандар өсөн иң кәрәкле эштәрҙең, иң мөһим булған йолаларҙың береһе - иртәрәк тороп, тулыһынса йыуынып, тештәрҙе таҙартып, хушбуйланып һәм таҙа кейемдәр кейенеп алғандан һуң, тәкбирҙәр әйтеп, мәсеттәргә барыу, ти. Был көндә йәнә мосолмандарға сәләм биреү; күңелле, шат булыу; мосолмандарҙы байрам менән ҡотлау; фәҡирҙәргә хәйер-саҙаҡа биреү; ыҙғышҡандарҙы килештереү; туғандарына, диндәштәренә барыу; барған ваҡытта бүләктәр алырға онотмау; ата-әсәләренден, кәрҙәштәрендең ҡәберҙәренә барыу; ҡунаҡтар саҡырып һыйлау - иң күркәм эштәрҙән һанала, ти. Был көндәр Мәккәгә хаж ғибәҙәте барған көндәр.

## Ҡорбан нисек салына?

Өс төрлө хайуанды: һарыҡ менән кәзә, һыйыр менән үгеҙ һәм дөйә ҡорбанға килтерелергә мөмкин. Башҡа хайуандарҙы ҡорбанға килтереп булмай.

**Динебеҙҙә ҡорбанға хайуан түбәндәгесә салына:**

- Хайуанды ҡорбан салына торған урынға көсләп алып килмәйҙәр.
- Хайуанды ыҙалатмай ғына, башын Ҡибла яғына ҡаратып, һул яғына һалалар.
- Өс аяғы бәйләнә, ә артҡы уң аяғы иректә ҡала.
- Ҡорбан салған ваҡытта булған кешеләр бөтәһе бергә ҡыҫҡырып Тәкбир әйтәләр: "Аллаһу Әкбәр, Аллаһу Әкбәр. Лә иләһә илләллаһу уаллаһу Әкбәр, Аллаһу Әкбәр үә лилләһил хәмд" - өс тапҡыр ҡабатлана.
- Бынан һуң Ҡорбан доғаһы итеп "Әл-Әнғәм" (162-163) сүрәһенең өләштәре уҡыла.
- Ошо доғанан һуң, "Бисмилләһи Аллаһу Әкбар" тип әйтеләр һәм бысаҡ менән хайуанды һуялар.
- Ҡорбан хужаһы ҡорбан килтерелгәндән һуң 2 рәҡәғәт намаҙ уҡый һәм Аллаһы Тәғәләнән теләгенең тормошҡа ашыуын һорай.

**Ҡорбан итен тулыһынса ярлыларға таратырға йәки үҙенә һәм ғаиләнә ҡалдырырға рөхсәт ителә, ләкин уны өс өлөшкә бүлеү яҡшыраҡ һанала:**

- Беренсе өлөшө күршеләргә һәм туғандарға таратыла, йәки ҡорбан хужаһы уларға ошо өлөштәрҙән һый әҙерләй.
- Икенсе өлөшө ярлыларға таратыла.
- Өсөнсө өлөшө үҙенең ғаиләһенә ҡала.

Ҡорбандың тиреһен һатыу тыйыла. Шуға күрә лә ҡорбан тиреһе ите кеүек үк, мохтаж мосолмандарға бирелә.

ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК



# МӨЖӘҮИР ХӘҘРӘТ -

## башҡорттоӊ бөйөк әүлиәһе

### Әүлиәгә рәхмәт әйттек

1955 йыл ине. Таӊ һарыһынан тороп, ҡыҙыбыҙҙы алып, Манһырға йүнәлдек. Беҙ барып еткәндә олатай өйҙән сығып килә ине.

- Иртәләгәнһегеҙ, балалар, - тине. - Һеҙҙән алда өс кеше бар. Улар кисә кис Аҡъярҙан йәйәүләп килеп ҡунды. Башта шулар күренер.

Өс ҡатын килде лә, беҙ һеҙҙән аҙаҡ булырбыҙ, тип, сират алдылар. Һөйләшеп киттек.

- Һеҙ Аҡъярҙанмы, кисә килеп ҡундығыҙмы?- тип һораным тегеләрҙән.

-Эйе.

- Олатай һеҙҙе көтә.

- Нисек көтә? Ул беҙҙе күрмәне, килгәнде ҡайҙан белде икән?

- Әүлиә кирәмәте был.

Ҡатындарҙы ҡарап бөткәс, уларға:

- Машиналы кешеләрҙе көтөгөҙ,- тигән,- улар һеҙҙе алып барып ташлар.

Зәйтүнә ҡыҙым менән индек тә олатайға тәғәйенләп алып килгән бүләкте, кҫтәнәсебеҙҙе бирҙек.

- Һеҙгә рәхмәт әйтер өсөн килдек. Күпме балнис юлын тапап та ҡыҙымдыӊ күҙе йүнәлмәгәйне, һеҙҙеӊ өшкөрөү бермә-бер килеште,-тинек.

- Изгелек ерҙә ятып ҡалмай, ул күктәргә аша. Бер аҙҙан ул ергә, беҙҙеӊ өҫкә бәрәкәт булып яуа. Һеҙ ҙә ергә бәрәкәт яуҙырып йөрөүселәрҙән. Рәхмәт әйтеп, ҙур сауап алдығыҙ. Инде ҡайҙан-ҡайҙа йәйәүләп килгән анау өс ҡатынды ултыртып алып ҡайтығыҙ. Йәнә бер сауаплы булырһығыҙ.

Олатай хушлашҡанда, юл төшкәндә инеп йөрөгөҙ, тип тороп ҡалды. Беҙ хәҙрәткә килгән ҡатындарҙы Уфимкаға алып ҡайтып, сәй эсерҙек. Аҙаҡ ҡартым уларҙы Аҡъярға илтеп ҡуйҙы.

### Улыбыҙ илауҙан туктаны

1957 йыл. Кесе улыбыҙ алһыҙ-ялһыҙ яҙһып илай. Түҙер әмәл ҡалмағас, улыбыҙҙы олатайға алып киттек. Мин баланыӊ йүргәген алыштырып биләгәнсе, ике ир килеп инде. Улар рус милләтенән ине. Олатай менән русса һөйләштеләр. Хәҙрәт уларға тоҙ өшкөрөп, бетеү яҙып бирҙе. Мин,эй, Аллам, бынауҙар араға инде лә ҡуйҙы, урыҫтан һуӊ өшкөрөүе килешһә ярар ине, тип уйлап та бөттөм, олатайыбыҙ:

- Эй, ҡыҙым, нишләп бушты уйлайһыӊ, - ти.-Беҙҙеӊ доға- үҙебеҙгә, уларҙыҡы үҙҙәренә башҡа. Шунан улымды алдына алып, илама, улым, илама, нишләп ҡаӊғыраһыӊ, тип башынан һыйпап, өшкөрә башланы.

- Әсәӊ Сәмсиямал, атаӊ Әхмәтғәле, улар һинеӊ хәләл ата-әсәӊ. Ҡышшш, мәлғүндәр, китегеҙ, баланы ҡаӊғыртмағыҙ, тип, тирә-яғына тәкөрөнөп, хөрмә төшөнән яһалған тиҫбеһе менән һуҡҡыланы. Улым ҡара тиргә батты. Бер аҙҙан тынысланып, йоҡлап китте. Бала уянғансы тип, Гөлйемеш абыстай әҙерләгән табынға ултырып, сәй эсеп алдыҡ. Ошо көндән алып улыбыҙ илауын ҡуйҙы. Был осраҡта олатайҙыӊ миненӊ нимә уйлауымды белеүе хайран итте. Алһыҙ-ялһыҙ илаған улыбыҙ ошо өшкөрөләүҙән һуӊ ыӊғайлы тып-тыныс балаға әйләнде.

### Хәҙрәт һыуы

Бер саҡ Хәкимйән исемле ағай килеп, әйҙә, хәҙрәткә барайыҡ әле, ҡәҙрәте ысынмы икән, тип, минеӊ бабайҙы ҡотортоп, Манһырға алып китте. Байыштан сыҡҡас та быларҙыӊ барыр юлында таштар үҫеп сыға башлай. Бер ҙур таш машинанныӊ аҫтына уҡ үҫеп сыға. Былар алға ла, артҡа ла китә алмай, шыҡырайып бер урында ултыра ла ҡуя. Бер нисә тапҡыр әүлиәне үҙ күҙе менән күргән минеӊ ҡарт:

- Был хәҙрәттеӊ хикмәте булыр,- тигән. - Бәлки, минеӊ теге аҡбаш шешә өсөндәр, тип, бардачокта ятҡан араҡыһын таштар араһына алып барып йәшергән. Машинаны таш өҫтөнән алыр өсөн күп мәшәҡәтләнгәндәр, аҫтына таш ташып һалып, домкрат менән саҡ тигәндәй күтәреп сығарып, ниһайәт, ҡуҙғалып киткәндәр. Хәҙрәт уларҙы, ғәҙәтенсә, мут йылмайып ҡаршы алған.

- Мин мулла тоҡомонанмын, Әлибаев Хәкимйән булам,- тип эре генә үҙен таныштырған теге ағайыбыҙ.-Һеҙҙе күрә килдек.

- Эй, Хәкимйән ҡусты, үҙеӊ мулла улымын тиһеӊ, үҙеӊ динһеҙһеӊ. Мине тикшереп йөрөгәнсе, ана, бәрәӊге баҡсаӊды утар инеӊ. Бил бауырынан ҡый баҫҡан, яӊғыҙ ҡатыныӊ унда бер үҙе бөксәнләй.

Хәкимйәндеӊ күҙе маӊлайына менә. Ысынлап та, ҡатыны Гөләйфә һуҡранаһуҡрана бер үҙе баҡса утап ҡалғайны. Хәҙрәт быны ҡайҙан белде икән? Был юлы олатай минеӊ бабайға шелтәле ҡараған, күп һөйләшеп тормайынса:

- Йөрөйһөгөҙ шунда ҡотороноп,- тигән. - Ҡайтышлай, Әхмәтғәле, бая таш араһына йәшергән нәмәӊде онотма, әтеү артыӊҙан үҙе тороп йүгерер.

Ҡоттары осҡан һынсылар Манһырҙан тиҙерәк тайыу яғын ҡарай. Әммә юлда туҡтап, араҡыларын алырға онотмайҙар. Уфимкаға ҡайтҡас, беҙҙеӊ гаражға инеп, теге шешәне бушатырға булғандар. Уларға тағы шул тирәлә йөрөгән бер-ике ир ҡушылған. Башта минеӊ бабай үҙе һалып эсеп ебәрә.

- Не понял, - тип, стаканды Хәкимйән ағайға һалып тоттора. Уныһы бер йотоп, башҡаларға бирә. Бер аҙҙан дөрт ир:

- Был ни, һыу ҙа инде,- тип, шарҡылдап көлөп ебәрәләр.

Шунда барыһы ла быныӊ хәҙрәт хикмәте икәнен аӊлай. Ауылда әлегә тиклем, хәҙрәт һыуын эскән, тигән лаҡап йөрөй. Әхмәтғәлем аҙаҡ, олатай эсмәҫкә ҡушты, тип, араҡы шешәһен ҡулына ла алманы. Ғүмеренеӊ ахырынаса Мөжәүир хәҙрәткә күӊеләндә ихтирам һаҡланы. Башҡаса Манһырға барырға ҡурҡты. Шулай уҡ диӊгә, муллаларға ихтирам менән ҡараны.

### Вазифа апай һөйләгәндәр

**Вазифа апай "Мөжәүир хәҙрәт" китабы сыҡҡандан алып, яҙыусыһын нисек күрергә икән, хәҙрәттеӊ атайыма, беҙгә күрһәткән әҙәм ышанмаҫлыҡ кирамәттәре тураһында һөйләр инем, тип уйлап йөрөгән. Ниһайәт, яҙған булғас, беҙҙе Аллаһы Тәғәләбеҙ осраштырҙы.**

Вазифа апайҙыӊ атаһы Зәйнуллин Рәхмәтуллаһыӊ Мөжәүир хәҙрәт хикмәте аша хәбәрһеҙ юғалған бер туған ҡустыһы Шәрифулланы ҡаҙаҡ далаларынан барып табыуы шаҡ ҡатырлыҡ. Хәтта был хәтирә тылсымлы әкиәткә тартым булып китә. Шул турала әҙерәк шигемде белдергәйнем, Вазифа апай ныҡ үпкәләне. "Инде йәшем һикһәнгә етеп килгәндә мин кеше алдап ултырмам, атайым үҙе беҙгә нисек бәйән иткән, мин ни бары шуларҙы ғына һөйләнем",- тине.

-Минеӊ атайым Зәйнуллин Рәхмәтулла Зәйнулла улы Бөрйән районы Байназар ауылында тыуып үҫкән, шунда ғүмер кисергән, күпте күргән, алдына алғанын урыны-еренә еткерә торған булдыҡлы кеше булған.-Вазифа апай минеӊ ихлас тыӊларға йыйынғанымды күргәс, тағы илһамланыбыраҡ һөйләргә керешә.

-Был хәл 1948 йылда була.Әсәйебеҙ ҡапыл ныҡлап ауырып, түшәккә йығыла. Башы әйләнә, аяҡтары тартыша, баҫһа, ҡолап бара. Урындыҡ ситтәренә таянатаяна ғына тышҡа сығып инә. Атайым Баймаҡ яғынан килгән кешеләрҙән Манһырҙа әүлиә хәҙрәт бар икән, уға барған һәр кеше һауығып ҡайта, килгән бер әҙәмдеӊ үткәнен дә, хәҙергеһен дә, киләсәген дә күреп, хатта юлда килгәндә ниҙәр уйлап килеүен белеп ултыра икән, тигән хәбәр ишетә һәм шунда уҡ хәҙрәткә барырға йыйына башлай. Әсәйебеҙ йөрөрлөк булмағас, атайыбыҙ үҙе генә барырға була. Исмаһам, тоҙ, сәй, һабын өшкөртөп, бетеү яҙҙырып алып ҡайтырмын, бер ыӊғай хәбәрһеҙ юғалған ҡустым Шәрифулла тураһында ла белешермен, тип уйлай. Яратҡан ҡатыны Вәлимәнеӊ һауығыуын ныҡ теләгән Рәхмәтулла ағайҙы аралағы ике йөҙ саҡрым ҡурҡытмай. Ҡайҙа йәйәүләп, атлы осраһа, арбаға ултырып үтеп, арып-талып, Манһырға барып етә. Хәҙрәт ул алып килгән нәмәләрҙе өшкөрөп бирә лә:

- Әбейеӊ йүнәләр,-ти.-Сәй эсергә ярата икән, ҡыйын булһа ла уға был ғәҙәтен ташларға тура килер. Ғүмерлеккә етерлек сәйҙе эшләтеп алған инде. Атайым "сәйҙе эшләтеп алған" тигән һүҙҙәрҙеӊ мәғәнәһен аӊламай, теклөп торғас, хәҙрәт уға төшөндөрөп бирә:

- Хәләл ризығыӊды ашап йөрөгән берәү сәй аша ҡатыныӊа боҙом яһаған. Ошо өшкөрөлгән сәйҙән бер һалып әсһен дә, артабан ҡатыныӊа һәр саҡ тик ҡайнаған аҡ һыу ғына эсергә тура килер,- тигән. Бетеү яҙып бирмәгән, ҡустыӊа барғанда барыбер юғалтаһыӊ, тигән. Алға төшөп шуны әйтергә була, хәҙрәт өшкөрөп биргән әйберҙәрҙе ҡулланғас, Вәлимә апай һауыға. Имсенеӊ әйткәнен тотоп, ғүмер буйы самауырҙан ағыҙып, аҡ һыу ғына эсә, аҙаҡ һаулығына бер ҙә зарланмай рәхәт йәшәй.

**Лира ЯҠШЫБАЕВА.**

**(Дауамы бар).**

УӉЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Мөхәббәт һәм байлыҡ йәлеп итеү

Күпмелер ваҡыт үтеп китте һәм һеҙ Юғары Минегеҙ менән тығыҙ бәйләнеш булдырҙығыҙ икән, ти. Ваҡыты-ваҡыты менән унан ярҙам һорап мөрәжәғәт итеүҙе еӊеләштереү өсөн үҙегеҙ өсөн берәй ҡул хәрәкәте уйлап табығыҙ. Һеҙ бармаҡтарығыҙ ярҙамында был хәрәкәтте яһаған һайын, мейегеҙ Юғары Минегеҙ менән бәйләнеш булдыраsаҡ.

Ниндәй ҡул хәрәкәте һайларға белмәйһегеҙме? Ғәҙәттә, барыһы ла доға уҡығанда ҡулланылған хәрәкәтте һайлай. Әммә был хәрәкәт үҙенеӊ элекке көсөн күптән юғалтҡан. Шуға ла мин үҙем был осраҡта бергә тоташтырылған баш һәм һуҡ бармаҡтарымды ҡулланам. Был хәрәкәт кешенеӊ иғтибарын да йәлеп итеп бармай, уны машина йөрөткәндә лә, ултырғанда ла, ятҡанда ла эшләп була.

**Ҡул хәрәкәтен программалаштырыу өсөн күнегеүҙәр:**

1. Иркенләп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ.

2. Күҙ алдына күӊелегеҙгә оҡшаған картиналарҙы килтерегеҙ.

3. Эстән генә Юғары Минегеҙҙеӊ яҡтылыҡ менән сорналған образын саҡырығыҙ. Күӊелдән генә: "Мин һине яратам", - тип әйтегеҙ.

4. Быны эшләгәндән һуӊ баш һәм һуҡ бармаҡтарығыҙҙы тоташтырығыҙ.

5. Эстән генә өс тапҡыр шулай тип ҡабатлағыҙ: "Мин ҡулдарымдыӊ бармаҡтарын ошо рәүешле ҡуйған һайын минеӊ мейем Юғары Минем һәм минеӊ Ижадсымды тәрәнерәк тоясаҡ".

6. "Мин тулы аӊымда" тип әйтеп, күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ.

Барт - гәзиттә фотограф булып эшләй. Ул был ысулды бер нисә йыл дауамында ҡулланған. Бер тапҡыр эштән ҡайтып килгәндә, ул баш һәм һуҡ бармаҡтарын тоташтырып, Юғары Миненән: "Минә тағы берәй ҡайҙа барырға кәрәкмәйме икән?"- тип һораған. Бер нисә секундтан һуӊ, ул үҙе лә аӊламайынса, уӊға боролоп китә һәм юл уны диӊгеҙ буйына алып сыға. Унда бер кәмәне ут ялмаған була. Барт машинаһынан йүгереп төшөп, бер нисә фотоһүрәт яһай һәм был фотолар өсөн уға ярайһы уҡ ҙур суммала аҡса түләйҙәр.

Джинни һәр ваҡыт ғаиләҡороп, балалар үҫтереү тураһында хыяллана. Бер ваҡыт ул интернетҡа инер алдынан ысын ир-егет менән осрашыу тураһындағы хыялын иҫенә төшөрә. Ошо көндә үк ул интернет аша буласаҡ тормош иптәше менән таныша һәм эш туй менән тамамлана.

Алда һеҙҙе Юғары көстәрҙеӊ ярҙамын алыу мөмкинлеге биргән ысулдар менән таныштырыуҙы дауам итәсәкбеҙ. Ә әлегә мөхәббәтле булғығыҙ һәм етеш тормошта йәшәгегеҙ килә икән, бары тик бармаҡтарығыҙ менән хәрәкәт яһарға ғына онотмағыҙ.

**Роберт СТОУН.**



## 15 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**

14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 "Время"
21.30 "Побег". Остросюжетный сериал
22.30 "Спецрасследование"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Подпольная империя", 2-я серия. Криминальная драма
00.50 "Телефонная будка"
02.20, 03.05 "Застрял в тебе"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**

14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Дворик". Сериал
15.25 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Слово женщине". Сериал
17.55 "Ефросинья", 190-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 30-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Гаишники. Продолжение". Брат за брата". Сериал
23.05 "Городок"
00.05 "Вести+"
00.25 "Гуд бай, Америка. Композитор Зацепин"
01.30 "Пять вечеров". Мелодрама
03.30 "Разбитое сердце. Евгений Евстигнеев"
04.30 "Городок"

### НТВ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 13.30**

13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
